✓ ***"Киске Өфө"гә яҙылырға өлгөрмәнем, тип үкенеүселәр юҡмы арағыҙҙа? Улар 17 февралгә тиклем яҙылһа, гәзитебеҙҙе марттан алдыра башлаясаҡ икәнен иҫкәртегеҙ, зинһар. 50665 индекслы "Киске Өфө"гә дүрт айға 240 һум 16 тингә яҙылып була. Почталарҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.***


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

9 - 15 ФЕВРАЛЬ (ШАҠАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№6 (528)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Буш арбаның...**

дыңғыры ҙур



3

**Балалар уйындары...**

халыҡ-ара кимәлдә Өфөлә үтәсәк



5

**Тыуым арта...**

үлем кәмей



6

**Кәмселектәремде эҙләйһеңме?**

Тимәк, көнләшәһең...



11

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ниндәй бюрократик ғәҙәттәр ҡаҡшата һеҙҙе? Уларҙы ниндәй юлдар, саралар менән бөтөрөп була?

***Константин ТОЛКАЧЕВ, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе:*** Февралдең тәүге көнөндә беҙ беренсе уҡыуҙа "Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында кодекс"ҡа халыҡҡа тейешенсә дәүләт хеҙмәте күрһәтмәгән чиновниктарға штраф күләмен билдәләүсе үҙгәрештәр ҡабул иттек. Был закон проекты халыҡ араһында ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы, шуға күрә был хаҡта блогымда яҙып үтеүҙе кәрәк тип таптым. Илебеҙҙә иҫ китмәле "ҡеүәтле" бюрократик традициялар барлыҡҡа килгән. Уларҙың быуаттар буйы тупланған бай тарихы бар. Ҡайһы саҡ классиктарҙы (Гоголь, Салтыков-Щедрин һ.б.) уҡыған ваҡытта әҫәрҙәрҙә бөгөнгө Рәсәйҙең дә ҡайһы бер һыҙаттарын һәм күренештәрен танырға була. Үкенескә күрә, дәүләт һәм муниципаль органдарҙа эшләүсе хеҙмәткәрҙәрҙе ярҙам һорап мөрәжәғәт итеүселәргә ҡарата ихтирамлы мөнәсәбәттә булырға саҡырыуҙар һәр ваҡытта ла тейешле һөҙөмтә бирмәй. Минең исемгә, шулай уҡ Дәүләт Йыйылышы адресына халыҡ мөрәжәғәттәрен ҡарауҙы, тейешле ҡарар ҡабул итеүҙе юҡ ҡына сәбәптәр менән һуҙыу, ығы-зығы килтереп тыуҙырыу факттары тураһында яҙылған хаттар бик күп килә. Кодекска үҙгәрештәр индереү, беҙҙеңсә, яуаплы кешеләрҙе рухландырып, уларҙы үҙҙәренә тапшырылған эшкә намыҫлыраҡ ҡарарға мәжбүр итәсәк. Был законды ҡабул итеү проблеманы тамырынан юҡ итмәйәсәк, әлбиттә. Шулай ҙа ул граждандарға үҙ хоҡуҡтарын яҡларға, ә тикшереүсе органдарға ғәйеплеләргә ҡарата ваҡытында сара күреү һәм, кәрәк була ҡалһа, язаға тарттырыу (шул иҫәптән аҡсалата) мөмкинлеге бирәсәк. Штраф эш сифатын яҡшыртыуға булышлыҡ итәсәк. Яҡшыға үҙгәреш булыр, тип уйлайым. Саралар етерлек кимәлдә түгел тип табылһа инде, законды артабан камиллаштырыу яғын ҡараясаҡбыҙ.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ДИАЛОГ

# ТӘБИҒӘТ, ҺИН - МИНҘӘ...

## Мин дә - һиңә

**Урал батыр дейеүҙәр, ен-пәрейҙәр, аждаһалар һәм ҡәһҡәһәләр менән тулы һыуҙы эсә һәм һәләк була. Унын кәүҙәһе тау рәүешен алып, Урал тауҙарына әүерелә. Ә бит, төптән уйлап ҡараһаң, эпосты ижад итеүсе халыҡ ҡасан да булһа бер һыуҙарға ен-пәрейҙәр, дейеүҙәр, аждаһалар һәм ҡәһҡәһәләр тулыр заманды алдан күрә белгән. Был күренеште беҙ хәҙерге телдә экологик һәләкәт тип атайбыҙ. Шулай тип ҡарағанда, "Урал батыр"эпосы фантастик әҫәрҙе лә хәтерләтә. Белеүебеҙсә, тормошобоҙҙа буласаҡ күренештәр иң тәүҙә ошо типтағы әҫәрҙәрҙә сағылыш таба бит. Бында бер генә һорау ҡала: Уралдай батырҙарыбыҙ тағы ла тыуырмы, әллә кешелек һәләк булырмы?**
**Башҡортостан Республикаһында 2013 йыл "Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылы" тип иғлан ителде. Ошо уңайҙан экология хаҡындағы тәүге әңгәмәгә Башҡортостан Ҡортсолоҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге генераль директоры, биология фәндәре докторы, профессор Әмир Миңнеәхмәт улы ИШЕМҒОЛОВ менән Рәсәй Федерацияһы Тәбиғәт ресурстары министрлығының Ағиҙел һәм Урал йылғалары һыу объекттары мониторингы буйынса федераль дәүләт учреждениеһы бүлек мөдире Әхтәм Рауил улы ҒӘББӘСОВты саҡырҙыҡ.**

**► Совет дәүерендә "Бер ағас ҡырҡһаң, ун ағас ултырт, ун ағас ҡырҡһаң, йөҙ ағас ултырт" тигән принцип һаҡлана ине. Был принципты бөгөн тормошҡа ашырырға нимә ҡамасаулай һуң?**

**Ә. Ишемғолов:** Беҙҙең Өфө ҡалаһында бер миллиондан ашыу кеше йәшәй. Ниңә быйылғы тирә-яҡ мөхитте һаҡлауға арналған йылда һәр бер Өфө кешеһенә үҙенең ағасын ултыртмаҫҡа? Форсаттан файҙаланғанда, баш ҡалала 1 миллион ағас ултыртылыр ине. Был - тотош урман, тигән һүҙ. Һуңғы ваҡытта элек дөрөҫ итеп үҙ урынына ултыртылмаған ағастарҙы ҡырҡырға тура килә. Шуға күрә ниндәйҙер тәртип менән, йорт янындамы, башҡа урындамы, йәғни тейелгеһеҙ үҫә алырлыҡ майҙандарҙа ағас ултыртып сығыу фарыз. Был саҡта һәр Өфө кешеһенең үҙе ҡарап тәрбиәләп үҫтерер ағасы барлыҡҡа килер ине.

**Ә.Ғәббәсов:** Был идеяны тейешле ойошмаларға дәррәү рәүештә күтәреп алырға һәм тормошҡа ашырырға ғына кәрәк. Әгәр ҙә ҡала эсендә шунсама ағасты ултыртырға урын етмәһә, ҡаланан ситтә, йылға буйҙарында ла күркәм урмандар үҫтерергә була.



**(Дауамы 8-9-сы биттәрҙә).**

ИШАРА

# РӘМИҘӘР ӘЛЕ ТЫУЫРҘАР...

**Гәзитебеҙҙең быйылғы беренсе һанында "Шағирҙарҙы заман тыуҙыра, ә халыҡ күтәреп кенә ала..." тигән мәҡәләлә күп тапҡырҙар ҡабатланған: "Ни өсөн бөгөн әҙәбиәтебеҙҙә бабичтар, назаровтар, рәмиҙәр тауышы юҡ?" - тигән һорауға яуап эҙләнә.**

Был һорау өҫтөндә уйланыуҙар бер шиғриәт өлкәһендә генә түгел һәм бер башҡортҡа ғына ҡағылмай инде ул. Ә ни өсөн космонавтикала циолковскийҙар, королевтар, курчатовтар юҡ? Ә ниңә кино сәнғәтендә комедиялар төшөрөү оҫтаһы Гайдай, тарихи фильмдар оҫтаһы Протазанов, ә йырҙа - Федор Шаляпин, шиғриәттә - Пушкин, ә башҡорт йырында Рамаҙан Йәнбәков, Илфак Смаков, Мәғәфүр Хисмәтуллин кеүек таланттар юҡ? Бөтәһе лә үткән быуатта тороп ҡалдымы ни шулай?

Мәҡәләнең "Шағирҙарҙы заман тыуҙыра, ә халыҡ күтәреп кенә ала..." тип аталыуы уйға һалды әле мине. Урыҫтарҙың "В России любят покойников" тигән әйтеме бар. Заман шағирҙарҙы тыуҙыра ла бит, тик күтәреп алыусылары ғына юҡтыр, тигән уй ҙа килә ҡайһы саҡ. Күптәрҙең исемен яҡты донъянан уҙғас ҡына күтәреп алған булабыҙ бит...

Әлбиттә, Рәми дәрәжәһенә күтәрелә алмаған шағирҙарҙы ла кире ҡағырға ярамай. Гәзитебеҙҙә баҫылған шиғри шәлкемдәрҙе уҡығанда йыш ҡына йөрәккә ятышлыларына ла тап булып, һоҡланып уҡыйым мин. Шиғыр ижад иткән һәр ижадсы миңә ҡиммәт. Ә бына үҙҙәре һүҙҙәрен (шиғыр, тип атаған булалар), үҙҙәре көйөн яҙып йөрөгән "ижадсылар" ишәйеүе борсоп ҡуя ҡуйыуға - улар әҙәбиәтебеҙгә лә, мәҙәниәтебеҙгә лә мәғәнәһеҙлек өҫтәй, бәҫһеҙләндерә. Ә Башҡортостан юлдаш телеканалы уларҙы туҡтауһыҙ рекламалай, үҫтерә. Ысын шағирҙар менән бик һирәк, "Автограф" тапшырыуында ғына осраштыра беҙҙең телевидение. Уныһы ла юбилей айҡанлы ғына эфирға килеп сыға. Шиғыр тыңлағы килгәндә "Культура" каналын асам. Ундағы шиғриәткә арналған тапшырыуҙарҙы ҡарайым да, аптырап ҡуям: ниңә беҙҙең Башҡортостан юлдаш каналында ошо илаһи шиғри һүҙгә урын юҡ? Прагматизм хөкөм һөргән, хистәргә урын ҡалмаған замана еттеме әллә? Байҙар ҡатламының ошо Көнбайыш ауырыуы менән ауырый икәне аңлашыла инде. Шиғриәт матди файҙа килтерәме, байлыҡ өҫтәйме, тигән уй биләйҙер ундайҙарҙың башын. Хис-тойғонан, изгелектән, шиғри һүҙҙән ваз кисеп тә әллә ни алыҫҡа китә алмаҫ ундайҙар. Йәшәйеш өсөн кешегә рухи байлыҡ кәрәк. Тағы ла... талантлы, һәләтле ижадсыларҙы күрә белһәк, күтәрә алһаҡ та рухи көрсөк урап үтер. Бабичтан һуң Рәми тыуған, Рәмиҙән һуң Рәшит Назаров тыуған. Рәми Ғарипов Рәшит Назаровты "гений" тип атаған. Рәми Ғариповтың һабаҡташы М.Шевченкоға арнап яҙған шиғырында шулай тиелә:

*Шекспирҙар әле тыуырҙар,*
*Ер-әсәбеҙ инде ауырҙа...*
*Ул әлегә генә тын ҡалған,*
*Тулғаҡ тотор мәле алдынан.*
*Кешеләргә шелтә ташлама,*
*Үҙ һүҙҙәрен әйтер бер улар.*
*Фәжиғәләр бөтә-башлана, -*
*Шекспирҙар әле тыуырҙар!*

1977 йылда арабыҙҙан киткән Рәмиебеҙ был шиғырында ла ниндәйҙер фажиғәне һиҙемләй һымаҡ, тик халыҡтың күңел байлығына ышаныуы көслө булғанға яҙғандыр ул был шиғырҙы. Милләтебеҙҙе яратайыҡ, уға ышанайыҡ. Рәми Ғарипов кеүек...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ниндәй бюрократик ғәҙәттәр ҡаҡшата һеҙҙе? Уларҙы ниндәй юлдар, саралар менән бөтөрөп була?

(Башы 1-се биттә).

***Ғәлинур ҠАЛМЫРҘИН, муниципаль хеҙмәт ветераны:*** Бюрократияның мин бер генә сәбәбен күрәм: халыҡ мөрәжәғәттәре буйынса эшләүсе чиновниктың, мин бит фәҡәт ошо халыҡ өсөн эшләйем, сөнки улар булмаһа, мин дә был урында ултырмаҫ инем, тигән уйҙың башына ла инеп сыҡмауы. Ҙур түрәме ул, бәләкәйме - юғарынан һауалы ҡараш ташлап, түрә булырға тырышырға түгел, ә халыҡ хеҙмәтсеһе икәнлеген бер минутҡа ла иҫенән сығармаған кешеләр эшләргә тейеш, тигән фекерҙәмен үҙем. Дәүләт һәм муниципаль идара кадрҙарын уларҙы ошо һөнәргә әҙерләүсе уҡыу йорттарында уҡ кеселекле итеп тәрбиәләү, психология, этика кеүек дисциплиналар булдырыу кәрәктер, бәлки? Юғиһә, йәштәр араһында үҙ һөнәре тәғәйенләнешен аңлап етмәүселәр ҙә күп. Әле лә хәтерләйем: район мәғариф бүлегенә етәкселек иткән саҡта бухгалтерия менән йыш ҡына һүҙ сығып китә ине. Теге йәки был мәктәптең финанс мәсьәләләрен хәл итергә, аҡса бүлергә тура килһә, бухгалтерҙар үпкә белдерә башлай: мин һәр ваҡыт мәктәп йомошон беренсе урынға ҡуям, директорҙарҙы яҡлап сығам, йәнәһе. "Әгәр мәктәптәр булмаһа, беҙ бында кемгә кәрәкбеҙ һуң? Улар мәнфәғәтен күҙәтер өсөн бит беҙ бында эшләп ултырабыҙ", тип әйтеү етә торғайны хеҙмәттәштәргә. Хакимиәт коридорында кәрәкле кабинетты таба алмай аҙашып йөрөгән өлкән кешеләрҙе осратһам, хәл-әхүәл белешеп, улар эҙләгән бүлмәгә етәкләп тигәндәй алып барып индереп ебәрә инем. Дәүләт, муниципаль хеҙмәт органдарының кешегә йөҙ менән боролоуы шунда ла күренә түгелме? Юғиһә, йомошон юллап килгән граждандарҙы, эш кешеһен маҙаһыҙлап йөрөйҙәр, тигәнде аңлатып, йөҙҙө сирып, ризаһыҙлыҡ менән ҡаршылап ултырыусылар ҙа бар. Киләсәктә, бәлки, бындай "эшем эйәләре"нең бер кемгә кәрәге лә ҡалмаҫ? Ысын булһа, 2015 йылға Рәсәй граждандарының 90 проценты дәүләт хеҙмәтен "берҙәм тәҙрә" ысулы буйынса аласаҡ, ә 2018 йылға дәүләт һәм муниципаль хеҙмәттәрҙең 70 проценты электрон юл менән тәьмин ителәсәк, тиҙәр.

***Фәтиха ҒӘРИФЙӘНОВА, уҡытыусы, Өфө ҡалаһы:*** Ҡағыҙ юллауҙың бик ығы-зығылы, мәшәҡәт эш булыуын белә инем, ләкин уның кешене аяҡтан йығырлыҡ афәт икәнлеген бер туған ағайым вафат булғас ҡына аңланым. Ғүмере буйы Себерҙә эшләп, һаулығынан яҙҙы. Сирле ир еңгәгә кәрәкмәне - айырылыштылар, балалары булманы. Өфөләге ике бүлмәле фатиры, машинаһы, берҙән-бер вариҫ булараҡ, миңә тороп ҡалды. Шуларға документ йүнләйем тип, үҙем ауырыу булдым. Маяковский бик белеп яҙған икән, мин дә был бюрократизм тигән нәмәне бүре кеүек үнәсенән сәйнәр дәрәжәгә еттем. Нотариуста һыу буйы сират тороп, бер папка документ, белешмә йыйып килтерергә фарман алғас башланды ла инде афәт. Өфө ҡалаһының Бессонов урамында БТИ (Баштехинвентаризация) тигән бер ойошма бар. Йәйге өс айым шул юлды тапап үтте. Фатирҙың техпланын, техпаспортын, кадастр паспортын, элеккеләре булыуға ҡарамай, яңыртабыҙ, тип 3 меңдән ашыу аҡса түләтеп, 40 көн буйы көттөргәс, ниһайәт, Росреестр тигән ведомствонан әҙер документтарҙы алырға тип килһәм, бирмәй сығарҙылар. Әлеге БТИ ҡағыҙҙарҙың береһендә тупаҫ хата ебәргән. Үҙҙәренең хатаһы булһа ла минән тағы түләтеп, кадастр паспортҡа ҡайтанан ғариза бирергә тура килде. Балалар уҡытҡас, эштән йыш һорап китеп тә булмай, расписание - беҙҙең өсөн закон. Әле әҙер документтарҙы ла барып алып булмай, сөнки ул БТИ-ла көнө буйы сират көтөргә кәрәк. Исмаһам, эш режимын халыҡ мәнфәғәтендә көйләһендәр ине - шәмбе, йәкшәмбе әҙер документты ғына биреп ултыра алыр ине бит, моғайын, бер-ике кеше. Әйткәндәй, унда мин төплө генә белгес осрата алманым. Консультация биреүселәре үҙҙәре ни һөйләгәнен белмәй, документтар ҡабул итеүсе йәш кенә ҡыҙыҡай бөтә нәмәне бутап, "бутҡа бешереп" ултыра. Әлеге хаталар тап уның арҡаһында килеп сыҡҡан да инде. Хәҙер БТИ тигән һүҙҙе ишетһәм, күңел уйнап китә: күҙ алдында бытыр-бытыр бешкән бутҡа пәйҙә була...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ТУҠТА, МӘЛ!

## ЙӨҘ ДУҪЫҢ БУЛҺЫН...



Туймазы районының башҡорт теле уҡытыусылары.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓БР Президенты Рөстәм Хәмитов һыу баҫыу зонаһына ингән ауылдар реестрын раҫланы. Республика Хөкүмәтенең тейешле ҡарарына ярашлы, БР Ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министрлығына, төбәктең Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитетына махсус һаҡлау саралары үткәрелмәйенсә, хәүеф янаған биләмәләрҙә капиталь төҙөлөштө, шулай уҡ зыяраттар һәм мал зыяраттары урынлаштырыуҙы тыйыу буйынса саралар күрергә ҡушылды. Ошондай уҡ күрһәтмәләр республика муниципалитеттарына ла бирелде. Ҡарар үтәлешенә контроллек итеү БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Марат Мәһәҙиевҡа йөкмәтелде.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов "2013-2015 йылдарға юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге" республика маҡсатлы программаһын раҫланы. Документ 2015 йылға юлдарҙа үлем осраҡтарын 2010 йыл менән сағыштырмаса 9 процентҡа кәметеүгә йүнәлтелгән. Был күрһәткескә өлгәшеү өсөн айырым бурыстар билдәләнгән. БР Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, маҡсатлы программаны финанслау күләме 1,1 миллиард һум тәшкил итә, шул иҫәптән республика бюджетынан 752,5 миллион һум йәлеп ителә.

✓Республика Хөкүмәте менән Башҡортостан буйынса Рәсәй Пенсия фонды бүлексәһе араһында төҙөлгән килешеүгә ярашлы, 2012 йылда Пенсия фонды Башҡортостандың социаль программаларын тормошҡа ашырыуға 17,2 миллион һум аҡса тотонған. Был аҡсалар 568 эшләмәгән пенсионерға, ҡартлыҡ йәки инвалидлыҡ буйынса хеҙмәт пенсияһы алыусыларға торлаҡҡа газ үткәреүгә, республикала йәшәгән 1737 кешенең торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға, ҡайһы бер райондарҙың халыҡты социаль хеҙмәтләндереү учреждениеларына ремонт үткәреүгә, 10 микроавтобус һатып алыуға тотонолған.

✓Күгәрсен районының Мораҡ ауылында Зәйнәб Биишева исемендәге әҙәби премия тапшырыу тантанаһы үтте. "Зәйнәб" фильмы һәм яҙыусының иҫтәлеген мәңгеләштереү буйынса 1995-2003 йылдарҙағы тапшырыуҙар шәлкеме өсөн тележурналист Луиза Фархшатова әҙәби премияға лайыҡ булды. Шулай уҡ "Яҡтыға" роман-трилогияһын рус теленә тәржемә иткән өсөн үлгәндән һуң Юлай Әминев премияға лайыҡ булды. Бынан тыш, әҙәби премия йырсы Ғәзим Ильясовҡа һәм "Йөрәк хәтере" китабы өсөн публицист Рәшит Иҙрисовҡа тапшырылды.

***✓ Йөклө арбаның, ошо ауыл аҡһаҡалы ише тәжрибәле кешенең, тәрән тамырлы боронғо милләттең, һау йәмғиәттең, граждандарының мәнфәғәтен төүге урынға ҡуйған алдынғы дәүләттең, ысынлап та, дыңғыры булмай.***

*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

# БУШ АРБАНЫҢ...

## дыңғыры ҙур

**Гәзиттең былтырғы һуңғы 52-се һанында "Ҡыңғырауҙың эсе буш " тигән әйтем хаҡында һүҙ алып барғайным. Унда динле булыу менән иманлы булыуҙың араһында ҙур айырма барлығы хаҡында уй йөрөтөп, уҡыусыларға был мәсьәләгә ҡарата үҙ фекерҙәрен яҙып ебәреүҙәрен дә һорағайным. Әллә Яңы йыл байрамы мәшәҡәттәре баҫты инде, яуап яҙыусылар булманы. Әммә үҙемә шылтыратып йә осрағанда фекерҙәрен әйтеп китеүселәр күп булды. Минең фекерҙәр менән ҡырҡа рәүештә килешмәүселәр ҙә табылды, әлбиттә. Был - тәбиғи. Ундайҙарҙың дәғүәһен ҡабул итергә лә, үҙемдең был йәһәттән яңылышҡанымды танырға ла ризамын, тик шундай шарт менән: әгәр ҙә улар барлыҡ диндәр рөхсәт ителеп, элекке атеистик ҡоролошта йәшәүселәр массовый рәүештә үҙ диненә ҡайтҡан ваҡытта ни өсөн кешеләр һәм халыҡтар араһында дошманлыҡтың арта барыуын нигеҙләй һәм аңлата алһа. Ошо урында халҡыбыҙҙың тағы ла бер "Буш арбаның дыңғыры ҙур" тигән мәҡәле иҫкә килеп төшә.**

Күпте күргән, күпте кисергән оло йәштәге зирәк аҡыллы ауыл аҡһаҡалы янына бер йәш кенә егет килгән дә, һаулыҡ та һорашып, хәл-әхүәл дә белешеп тормаҫтан, үҙенең Шәреҡ тарафтарында оло уҡыу йортонда уҡып, ҙур белемгә эйә булыуы хаҡында һөйләп, маҡтана башлаған. Үҙенең телмәрендә әллә ниндәй ҡолаҡҡа ятышһыҙ ят исем-шәрифле олуғ ғалимдарҙың фекерҙәрен дә ҡулланған йәш белемсе. Үҙе юғары материялар, идеялар хаҡында фәлсәфә ҡора, үҙе ике һүҙ араһына "Һеҙ дөрөҫ йәшәмәйһегеҙ, сөнки тормоштоң ысын асылын аңлап бөтмәйһегеҙ, бына оло донъя ошондай принциптар менән йәшәй, бына ошо рәүешле ғибәҙәт ҡыла..." тигән һүҙҙәрен ҡыҫтыра икән. Уның һөйләгәнен аҡһаҡал тыңлап-тыңлап ултырған да:

-Әләйгәс, һин дөрөҫ йәшәй белгәсең, белемсе булғасың, улым, һиңә бер йомош ҡушам. Кемгә ҡушырмын, тип тора инем, килеп шәп иттең әле. Ана, минең әүеҫлек аҫтында Туры айғырым тора. Шуны менеп ал да, Силәбе баҙарына алып барып, йөҙ мең һумға һат. Әгәр ҙә шул тиклем хаҡҡа алыусы булмаһа, айғырҙы кире алып ҡайт, - тип белемсе егеттең артабан нотоҡ уҡырға тип аҫҡан ауыҙын шап иттереп яптырып та ҡуйған.

Йәш кешегә аҡһаҡалдың ҡушҡанын үтәмәйенсә башҡа сара ҡалмаған. Сөнки уның был ауылға килеүенең маҡсаты ла уның мәсетенә имам-хатиб йә аҙансы булып урынлашмаҡта икән.



Ике көн буйына сит баҙарҙа йөрөгән егет кеше. Әммә барлыҡ белемен ҡулланып, һатып алыусылар алдында нисек кенә итеп оҫта һайрамаһын, тауарын маҡтамаһын, Туры айғырға шунсама хаҡты биреүсене таба алмаған. Һатып алыусыларҙың да зитына тейеп бөткән йәш белемсе. Уны һатып алыусылар әрләй-әрләй хатта баҙарҙан ҡыуып сығарыр хәлгә етмәй саҡсаҡ тыйылған. Күберәк үҙенең ниндәй белемгә эйә булыуын күрһәтергә теләгән ул. Аптыраған-алйыған белемсе кире ауылға әйләнеп ҡайтҡан да, аҡһаҡалға:

-Айғырығыҙға илле мең һумдан артыҡ биреүсе кешене таба алманым. Һеҙ, олатай, юрамал мине шулай ыҙалатып йөрөтәһегеҙ, - тип асыуын да белдергән.

-Баҙарға яҡын ғына Афзал исемле бер кеше йәшәй, айғырҙы шул кешегә тәҡдим итеп ҡара, бына адресы - тип, аҡһаҡал белемсегә Афзалдың адресы яҙылған ҡағыҙҙы тоттороп, айвайына ҡуймай, Силәбегә кире оҙатҡан.

Егеттең юлы уңған был юлы. Ҡалаға нисек барып етһә, шундай тиҙлектә әйләнеп тә ҡайтҡан. Ул ҡайтып төшөү менән:

-Ә ниңә төүге тапҡыр барғанда миңә Афзал ағайға барырға кәрәклекте әйтеп ебәрмәнең, олатай, бына шуның өсөн ике тапҡыр йөрөргә тура килде үҙемә. Ике көн буйы ваҡыт әрәм итеп баҙарҙа ла торорға кәрәкмәҫ ине, - тип, тағы ла нығыраҡ итеп дәғүәһен еткергән.

-Нисек инде улай, һин бит, улым, үҙең миңә килгәс тә үк, һаулыҡ та һорашып тормайынса, хәл-әхүәл белешмәйенсә, шундуҡ аҡыл өйрәтергә тотондоң. Дөрөҫ йәшәмәйһегеҙ, тормоштоң ысын асылын аңламайһығыҙ, тинең. Шулай тигәсең, һин бар нәмәне лә беләһеңдер тип уйланым...

-Мин донъяның бөйөк аҡыл эйәләренең тормош хаҡындағы һүҙҙәрен, уларҙың хеҙмәттәренең айырым өлөштәрен генә килтерҙем, - тип ярһып киткән йәш белемсе. -Ә бына һеҙҙең айғырҙы баҙарға түгел, ә Афзал ағайға алып барырға кәрәклекте ҡайҙан беләйем? Мин бит һеҙҙең ауыл кешеһе түгел...

-Бына шуның өсөн дә һинең миңә килеп һаулыҡ та һорашмаҫтан, хәл-әхүәл дә белешмәҫтән, үҙеңдән өс-дүрт тапҡыр күберәк йәшәгән кешегә аҡыл өйрәтә башлауыңды баҙар ләстите һымаҡ ҡабул иттем дә, үҙеңдә шундай һүҙҙәрҙең ояһы булған баҙарға ебәрҙем инде, улым. Шундай ҙур белемгә эйә булып та, һаулыҡ та һораша белмәгәсең... - тиеп кеткелдәгән аҡһаҡал.

- Һеҙ, олатай, мине барыбер мысҡыл иттегеҙ һәм итәһегеҙ. Бында мин алған белемдең ниндәй ҡыҫылышы бар. Бында бит һүҙ айғырҙы һеҙ әйткән хаҡҡа һатыу тураһында бара, - тип һаман да оторо ярһып кәзекләгән йәш белемсе.

-Уныһы айырым мәсьәлә, улым. Сит баҙарҙа минең айғырға ауырлығына, йәғни унан күпме ит килеп сығыуына ҡарап хаҡ бесәләр. Ә Афзал уны башҡорт тоҡомло нәҫел айғыры булараҡ баһалай. Үҙең беләһең, башҡорт тоҡомло аттар ҡыш тибендә аҙыҡты үҙенә-үҙе таба, беҙҙең бейә һөтөнән эшләнгән ҡымыҙға бер ниндәй ҡымыҙ етмәй донъяла. Белемсе булғасың, башҡорт балаһы булғасың, быларҙы беләһеңдер, тип уйланым...

-Мин етем генә үҫтем, олатай, малай ғына сағымда илдән сығып киттем. Мин быларҙы, ысынлап та, белмәй инем, - тигән хәҙер инде үҙ хәләтенә төшөнөп, сигенә башлаған егет.

-Буш арбаның дыңғыры ҙур була, улым, Шәреҡтә белем алып ҡайтыуың яҡшы, әммә һиңә оло тормош юлы үтергә, тәжрибә тупларға кәрәк әле, - тиеп һөйләшеүҙе йомғаҡлаған аҡһаҡал.

Буш арбаның дыңғыры ҙур. СССР-ҙың һуңғы генераль секретары, төүге һәм һуңғы президенты Михаил Горбачев власҡа килгәс, атайымдың бер туған ағаһы Басир олатайым мәрхүм шундай һүҙҙәр ҙә әйткәйне: "Бигерәк йәш һәм күп һөйләй. Буш арбаның дыңғыры ҙур. Илде юҡҡа сығарыр ул. Әүәле аҡһаҡал йәшенә етмәгән кешене ил башлығы итеп ҡуймағандар..."

Олатай илдең тарҡалыуына тиклем йәшәй алманы, әммә хәҡиҡәт уның яғында булып сыҡты.

Буш арбаның дыңғыры ҙур. Крәҫтиән көнкүрешенең бер бәләкәй генә өлөшөн тәшкил итеүсе һүҙҙәр былар. Ауылдан сабынлыҡҡа барып еткәнсе буш арбаның туҡтауһыҙ дыңғырлап, ҡайтҡанда, яңы сабылған бесән өҫтөндә майҙай ireп ҡайтҡандар яҡшыраҡ аңлай торғандыр был хәлде. Йөклө арбаның, ошо ауыл аҡһаҡалы ише тәжрибәле кешенең, тәрән тамырлы боронғо милләттең, һау йәмғиәттең, граждандарының мәнфәғәтен төүге урынға ҡуйған алдынғы дәүләттең, ысынлап та, дыңғыры булмай. Буштар, тәжрибәһеҙҙәр, тамырһыҙҙар һәм тарихһыҙҙар ғына дыңғырлай.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ТЕЛӘКТӘШЛЕК КӘРӘК

**Баш ҡалаға ниңә кәрәк башҡорт телендә уҡытылған мәктәп? Баш ҡалаға ниңә кәрәк башҡорт гәзите? Беҙ ошо һораүҙар ҡуйылған һынау алдына баҫып, ул һораүҙың урынһыҙ икәнен көс, тир түгеп иҫбатлауға, көрәшкә дусар ителгәнбеҙ.**

Бынан ҡырҡ йыл элек 20-се ҡала башҡорт мәктәбен аҫҡанда һәм уны һаҡлап ҡалғанда ла шундай ауыр һынау аша үтелгән. Башҡорт теле уҡытыусылары бөгөн дә шул һорау алдында стресс кисереүҙе дауам итә. Мин үҙем дә "Өфөгә ниңә кәрәк ул башҡорт гәзите?" тигән һорау алдында ҡалдым ун йыл элек һәм ошо йылдар буйы уның кәрәк булыуын раҫлау өҫтөндәмен.

Был хәҡиҡәтте раҫлау еңел түгел яңғыҙыңа. Бында милләттәштәрҙең иң тәрәүе кәрәк. Балаларыңды башҡорт мәктәбендә уҡыт - мәктәп алдында ябылыу ҡурҡынысы тормаясаҡ; башҡорт спектаклдәренә, концерттарына йөрө - театр, филармония тамашасылар йыя ала икән, улар ҙа йәшәүгә хоҡуҡлы икәнен белгертә аласаҡ; башҡорт баҫмаларын уҡы - уларҙың тиражына ҡарап, милләттең иҫәбе тураһында ғына түгел, уның аң, рух кимәле тураһында ла фекер йөрөтөрҙәр.

Шулай уҡ етәксе булып эшләгән милләттәштәрҙең ҙә иң тәрәүе кәрәк. Әгәр ҙә һин етәксе икәнһең, халҡыңа хеҙмәт итергә кәрәклекте лә онотма. Башҡа милләт вәкилдәренән өлгө ал булмаһа. Һин етәксе икәнһең, үҙ милләт вәкилдәренә лә иғтибар күрһәт, илтифат ит. Эше юҡ икән, эш табышырға ярҙам ит. Һиңә милләттәшең үҙ зарҙары менән ингәндә, уларҙы тыңлай бел. Сөнки уны башҡалар тыңламаясаҡ һәм теләктәшлек күрһәтмәйәсәк.

Әйткәндәй, мин "Киске Өфө" гәзитен ойошторғас, Өфө буйлап етәксеһе башҡорт булған предприятие, ойошмаларҙы йөрөп сыҡтым, гәзитте таратыуҙа ярҙам итеүҙәрен һораным. Күбеһе ярҙам итте. Теләктәшлек шулай була...

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Ҡаланың электр транспорты селтәрен яңыртыу программаһы сиктәрендә Өфөлә биш яңы троллейбус һатып алынды. Былтыр Өфөгә ун троллейбус һәм дүрт трамвай һатып алынғайны. Ҡаланың электр транспорты селтәрен яңыртыу программаһы сиктәрендә 2013-2015 йылдарҙа йәмғеһе 100 троллейбус, 100 трамвай һәм 20 электробус һатып алыу планлаштырыла. Баш ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов билдәләүенсә, бөгөн барлыҡ пассажирҙарҙың дүрттән бер өлөшө, йәғни 55 миллион кеше электр транспорты менән йөрөй. Бынан тыш, әлеге ваҡытта Өфө белгестәре трамвай һәм метробус кеүек тиҙ йөрөүсе ер өҫтө транспорты төрҙәре системаһын әҙерләү буйынса проектлау эштәрен алып бара.

✓Сибайҙа 12 етем балаға фатир асҡыстары тапшырылды. Уларға фатирҙар социаль торлаҡ төҙөү республика программаһы буйынса төҙөлгән йорттан бирелде. "Былтыр ҡала 38 етем баланы торлаҡ менән тәьмин итте. Торлаҡ сертификаттары Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарына һәм уларҙың тол ҡатындарына - йәмғеһе 23 кешегә, шулай уҡ өс күп балалы ғаиләгә, бер инвалидҡа тапшырылды. Йәштәр программалары буйынса 30 ғаилә торлаҡ шарттарын яҡшыртты. Иҫке йәки авария хәлендәге йорттан күсереү программаһы буйынса алты күп фатирлы йорт төҙөлдө, тиҙҙән унда 56 ғаилә күсәсәк", - тип хәбәр иттеләр Сибай ҡалаһы хакимиәтенең мәғлүмәт-аналитика бүлегенән.

✓Башҡортостанда 2012 йылда 107 мең сит ил кешеһе иҫәпкә торған. Уларҙың күпселеге - Үзбәкстан, Тажикстан, Әзербайжан граждандары. Федераль миграция хеҙмәтенең БР буйынса идаралығы 1162 кешегә Рәсәй Федерацияһы гражданлығы биргән. Үткән йылда 16 мең эшкә рөхсәт ҡағыҙы һәм 19 мең хеҙмәт патенты теркәлгән. Сит ил хеҙмәткәрҙәре түләгән һалым күләме 90 миллион һумдан ашҡан. Миграция ҡануниәтен боҙған өсөн һалынған штрафтар 80 миллион һум тәшкил иткән.

✓2012 йылда "Ирәмәл" тәбиғәт паркында 10 меңдән ашыу кеше булған. Ирәмәл тауына менергә теләүселәрҙең күпселеге - Силәбе, Екатеринбург, Өфө ҡалалары туристары. Тәбиғәт паркы директорының фән буйынса урынбаҫары Илсаф Ғәбдиев хәбәр итеүенсә, Яңы йыл байрамдарында бында дөйөм алғанда 200 кеше булған. Әлеге ваҡытта һәр шәмбе һәм йәкшәмбе һайын тауға яҡынса 40 турист күтәрелә.

**"Башинформ"дан.**

**✓ Ә был инде административ хоҡуҡ боҙоу булып тора. Был мәсьәләне сисеү өсөн ҡала хакимиәте махсус хеҙмәт булдырырға ла уйлай. Ул ҡар таҙартыу техникаһына ҡамасаулаусы машиналарҙы штраф туҡталҡаһына алып китәсәк.**



ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ҠАҒЫҘ ПАСПОРТ УРЫНЫНА...

**Ике йылдан һәр Рәсәй кешеһенең төп документы - паспорт - таныу алмаҫлыҡ булып үҙгәреүе мөмкин. Был хаҡта Рәсәйҙең Иҡтисадты үҫтереү министрлығы сайтындағы "Рәсәй Федерацияһының шәхесен белдереүсе төп документ хаҡында"ғы Федераль закон проектын уҡып белеп була.**

Әгәр ҙә закон проекты яҡлау тапһа, 2015 йылдың 1 ғинуарынан ике башлы бөркөт төшөрөлгән һәм барыһы ла өйрәнгән ҡыҙыл тышлы ҡағыҙ документ урынына банк картаһына оҡшаған пластик паспорттар ҡулланылышҡа инәсәк. Яңы паспорттың микрочибында кеше хаҡында бар мәғлүмәт тупланасаҡ һәм ул "электрон идентификациялаусы карта" тип аталасаҡ. Былдай документты 14 йәше тулған һәр Рәсәй гражданы алырға тейеш буласаҡ. Шул уҡ ваҡытта ҡағыҙ паспорт бер көн эсендә ҡулланылыштан сығарылмаясаҡ һәм закон ҡабул ителгәндән һуң тағы ла 10 йыл ғәмәлдә буласаҡ. Сит ил паспорты иһә былдай үҙгәрештәргә дусар ителмәйәсәк.

# БӘЛӘКӘЙ ГЕНӘ ШАТЛЫҠ

**Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте Ҡарарына ярашлы, 1 февралдән бөтә төр хеҙмәт пенсиялары күләме 6,6 процентҡа артты. Уның суммаһы һәр кемдең үҙенең дөйөм пенсия күләменә бәйле, төрлөсә буласаҡ.**

Ике пенсия алыусыларҙың фәҡәт береһе - хеҙмәт пенсияһы ғына арттырыла. Һеҙәмтәлә, 992 мең кеше, шулай уҡ дәүләт пенсияһы менән бергә йәше буйынса хеҙмәт пенсияһы ла алыусы 6 мең хәрби пенсионер ҙа өҫтәмә аласаҡ. Шулай итеп, Башҡортостанда хеҙмәт пенсияһының уртаса күләме - 9 450 һум, ә ҡартлыҡ буйынса хеҙмәт пенсияһының уртаса күләме 9 800 һум тәшкил итәсәк.

Рәсәй Пенсия фондының Башҡортостан буйынса идарасыһы Фоат Хантимеров әйтеүенсә, пенсияларҙы түләү өсөн айына өҫтәмә рәүештә 600 миллион һум талап ителә. Аҡса күсерелгән, һәм 1 февралдән республиканың хеҙмәт пенсияһы алыусыларының бөтәһе лә пенсияны яңы күләмдә ала башланы.

**Рәсәй Пенсия фонды БР буйынса бүлексәһенең матбуғат хеҙмәте.**

# ҺӨНӘРЕҢӘ ЛАЙЫҠ БУЛ

**Рәсәй юристар ассоциацияһы юрист кадрҙарына квалификация һәм сертификат биреү системаһының проекты өҫтөндә эш башланы.**

Шуға ярашлы, киләсәктә юристарҙың бөтәһенә лә үҙҙәре һайлаған һөнәргә лайыҡ икәнлектәрен иҫбатларға тура киләсәк. Уларҙың белем һәм әҙерлек кимәлен һөнәри йәмғиәттәр вәкилдәренән торған абруйлы жюри тикшерәсәк. Был бурысты бойомға ашырыуҙың ике төрлө юлы билдәләнгән: юридик вуздарҙы бойондороҡһоҙ аккредитациялау һәм һайлаған һөнәренә лайыҡлылыҡ хоҡуғы биреү өсөн бөтә юристар өсөн ҙә квалификация имтихандары индереү. Имтихан тапшыра алмағандар был өлкәлә эшләй алмаясаҡ. Ассоциация рәйестәше Сергей Степашин һүҙҙәренә ҡарағанда, юридик вуздарҙың ни бары 16 процент самаһы өлөшө генә был аккредитацияны үтә аласаҡ. Әйткәндәй, юридик вуздарҙың ҡайһылары аккредитациянан баш тарта. Әлеге ваҡытта 104 вузда тикшереү үткәрелгән дә инде. Киләһе этап - вуз тамамлаусылар өсөн сифатлы һөнәргә фатиха бирәсәк махсус имтихандар буйынса бәхәсле фекер алышыуҙар бара.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ СӘЙЕР

**"Һыйыр мөгөҙөн һындырыр инем, көнөм генә ҡыҫҡа", тип үкенһә лә, февраль ҡыштың иң ҡатмарлы айы тип һанала. Әллә ул үҙенең иң ҡыҫҡа ай булыуының ҡоһорон ҡайтарырға тырышып, ҡарын да йәлләмәй, бурандарын да уйната. Синоптикатар мәғлүмәте буйынса, алдағы көндәрҙә лә тап февралдең ҡарлы-буранлы көндәре дауам итәсәк әле.**

# ҠАЛА ИХАТАЛАРЫН...

## ҡарҙан таҙартырмын тимә!



Ә тәбиғәттең был күренеше, тәү сиратта, баш ҡаланың торлаҡ-коммуналь хеҙмәт күрһәтеү ойошмаларының нисек эшләүенә һынау булып тора ла инде. Ләкин бында барлыҡ етешһеҙлектәрҙе бары тик уларға ғына ҡайтарып ҡалдырыу дөрөҫ булмаҫ ине. Сөнки бөгөн ошо өлкәлә ТСЖ (Торлаҡ милекселәре ойошмаһы), УК (Идара итеү компаниялары) һ.б. ойошмалар (ЖЭУ) хеҙмәт күрһәтә. Тимәк, әгәр закон буйынса дөйөм йорт милкенең торошо (шулай уҡ йорт территорияһына ҡараған майҙандар) өсөн милекселәр яуап бирә икән, ТСЖ-лар, УК-лар һ.б. менән йортто коммуналь өлкәлә хеҙмәтләндереү тураһында килешеү төҙөп, милекселәр яуаплылыҡты ошо хеҙмәтләндереүсе ойошмалар елкәһенә һала. Шуға күрә милекселәр, идара итеүҙең формаһына ҡарамаҫтан, ҡыйыҡтарҙы ҡарҙан, аҫылынып торған боҙбармаҡтарҙан таҙартыуҙы талап итергә хоҡуҡлы. Был хеҙмәттәр торлаҡ йорттарҙы тотоу буйынса эштәр исемлегенә индерелгән.

Юҡһа, беҙҙең Рәсәй ысынбарлығы нисек: көн һайын ҡыйыҡтарҙан һәленеп торған ҡар, боҙбармаҡтарҙы күрәбеҙ, көн һайын шунан үтеп китәбеҙ, әммә бер кем дә хеҙмәтләндереүсе ойошмаға, улар мөрәжәғәтҡә илтифат бирмәгәндә, юғарыраҡҡа мөрәжәғәт итергә ашыҡмайбыҙ. Ә инде берәйһебеҙҙең башына ҡар ҡатламы йәки боҙбармаҡ килеп төшһә, Ньютон яңы закон асҡан кеүек, үҙебеҙгә яңы ҡанун асып, бына, закон да шулай яҙылған, тип, хоҡуҡтарыбыҙҙы дауларға ашығабыҙ. Хоҡуҡтарыбыҙҙы белеп тә, ниндәйҙер фажиғә йәки бәхетһеҙлек осраҡтары булмай тороп, ниңәләр, йығылыр урыныбыҙға һалам йәйеп ҡуйыу тураһында түгел, ә был миңә ҡағылмай, нишләп мин йөрөргә тейеш, тип уйлайбыҙ. Мәҡәләне яҙғанда, фотохәбәрсебеҙ менән Өфө урамдары буйлап, йорт һәм төрлө биналар ҡыйыҡтарын күҙҙән үткәреп йөрөп килдек. Ҡар һәм боҙбармаҡтар, нигеҙҙә, хәҙер инде "боронғо" тигән ярлыҡ алырға хоҡуҡлы иҫке йорттарҙа, мәктәп биналарында, тукталыштар ҡыйығында күҙгә ташлана. Ә бына заманса архитектура буйынса төҙөлгән биналарҙың ҡыйығы ҡасандыр стандарт булған "өсмөйөш" итеп түгел, ә ҡыйыҡ өҫтөндә тағы бер майҙансыҡ һыҙап булырлыҡ итеп, йәйенке итеп яБылған, шуға күрә улар хәүеф тыуҙырмай. Бында шуға ла иғтибар итергә кәрәк: хәҙер күп биналар йә ҡуртымға, йә шәхси милеккә бирелгән. Улар, нигеҙҙә, коммерция структураларына ҡарай. Әммә улар сауҙа йәки көнкүреш һәм башҡа хеҙмәт кенә күрһәтергә тейеш, тигәнде аңлатмай - биләгән биналарҙың ҡыйығын ҡарҙан һәм боҙбармаҡтарҙан таҙартыу өсөн улар үҙҙәре яуаплы.

Февраль бурандары һәм ҡарҙары юлдарҙы таҙартыу хеҙмәтенә лә ныҡлы талап ҡуя, сөнки тәжрибә күрһәтеүенсә, заман алға барған һайын, халыҡ машинаны байлыҡ итеп түгел, ә ысынлап та хәрәкәт итеү сараһы тип ҡарай һәм һәр кем үҙенең "тимер ат"ында хәрәкәт итергә тырыша. Һөҙөмтәлә юлдар ныҡлап таҙартылып өлгөрмәй, машиналар күп, тығындар барлыҡҡа килә. Шулай уҡ ҡала буйлап йөрөп сығыуҙан асыҡлауыбыҙса, баш ҡаланың иң матур таҙартылған урамы - Октябрь проспекты. Уны бер нисә техника "ялап" тигәндәй сыға. Әммә башҡа урамдарға, йорт ихаталарына инә башлаһың, хәлдәр хөрт. Бында, әлбиттә, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ йәки йорт ихаталарын таҙартырға тейешле ТСЖ, УК хеҙмәткәрҙәрен ғәйепләп тә булмайҙыр. Сөнки улар үҙҙәренсә тырыша, тик бына йорт алдарындағы машиналарҙың күплеге махсус техникаға үтергә юл да ҡалдырмай тиерлек. Ҡар көрәүсе тракторҙар улар араһынан миллиметрлап тигәндәй шыуышырға мәжбүр. Саҡ ҡына яңылыш боролоп йәки шәберәк ҡуҙғалып, берәйһенең машинаһын яңылыш ҡына сыйҙырып ҡуйма - хужалары хәҙер хоҡуҡтарын даулай башлар. Ләкин улар бер хәҡиҡәтте генә онота: йорт ихатаһы - машина парковкаһы урыны түгел. Ул бары тик милекселәрҙең дөйөм йорт милке иҫәбендә. Әгәр дөйөм йорт милке менән идара итеү ТСЖ-ға йәки УК-ға килешеү нигеҙендә тапшырылған икән, тимәк, уны ошо ойошмаларҙың рөхсәте булғанда ғына үҙеңдең ҡарамаҡҡа файҙаланыу мөмкин (был осраҡта һүҙ машина ҡуйыу - парковка тураһында бара). Тимәк, бөгөн күпселек машина хужалары техникаһын йорт алдына рөхсәтһеҙ һәм үҙ белдегенә ҡуя булып килеп сыға. Ә был инде административ хоҡуҡ боҙоу булып тора. Был мәсьәләне сисеү өсөн ҡала хакимиәте махсус хеҙмәт булдырырға ла уйлай. Ул ҡар таҙартыу техникаһына ҡамасаулаусы машиналарҙы штраф туктаЛҡаһына алып китәсәк.

Әйткәндәй, ҡар һәм буран эҙемтәләрен бөтөрөү ниндәйҙер кимәлдә эш биреүсенән дә тора. Сөнки Хеҙмәт кодексында "производство заруралығы" тигән термин бар. Әгәр ҡар туктауһыҙ яуып, "һә" тигәнсе юлдарҙы көрт баҫа икән, торлаҡ-коммуналь хеҙмәт күрһәтеүсе ойошмалар үҙ хеҙмәткәрҙәрен билдәле сәғәттәрҙә генә түгел, төнөн дә йәлеп итергә мөмкин (йәки мәшғүллек бюроһында иҫәпто тороусыларҙы сығарыу ҙа үҙен аҡлар). Ләкин шул уҡ Хеҙмәт кодексына ярашлы, төнөн йәки сменанан тыш эшләү икеләтә хеҙмәт хаҡы түләргә мәжбүр итә. Ә инде урамдарҙы таҙартыусы техникаға килгәндә, уларҙың артыҡ әйләнеш яһауы ла шул бер үк темаға барып тоташа. Ә былай - һарыҡ та тук, бүре лә иҫән. Оптималләштереү заманы бит. Тик тәбиғәттең генә үҙ ҡанундары...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

# Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөнөң Ленин районы уҡыусылары "Ҡағыҙ бумы!" акцияһының икенсе этабы сиктәрендә 17 тоннаға яҡын макулатура йыйған. Шулай итеп, акция йомғаҡтары буйынса Башҡортостан баш ҡалаһының Киров һәм Ленин райондарында йәмғеһе 48 тоннанан ашыу макулатура йыйылған. Тәбиғәтте һаҡлау акцияһының киләһе этаптары Өфөнөң Дим һәм Совет райондарында дауам итәсәк. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, "Ҡағыҙ бумы!" Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылы сиктәрендә үткәрелә. Эшкәртеүгә йүнәлтелгән бер тонна макулатура дүрт кубометрға яҡын ағасты һаҡлай, ә был биш ҙур ағас тигән һүҙ.

✓Өфөлә "Йомарт йөрәк" хәйриә марафоны сиктәрендә инвалидтар өсөн юридик клиника асылды. Тәүге көндә консультация алырға 15 кеше килде. Квалификациялы белгестәр барлыҡ һорауҙарға яуап бирҙе, дәүләт тарафынан гарантияланған социаль ярҙам саралары тураһында һөйләне. Проект сиктәрендә былдай ярҙам бушлай күрһәтелә. Граждандар Октябрь проспекты, 114/1 адресы буйынса Өфө хакимиәтенең Халыҡҡа социаль ярҙам идаралығында һәр шишәмбе һайын 16 сәғәттән 18-гә тиклем ҡабул ителә.

✓Өфө округы хакимиәте ҡала биләмәһендә төҙөлгән иң яҡшы шәхси торлаҡ йортҡа, иң яҡшы шәхси торлаҡ йорттар төркөмөнә смотр-конкурс иғлан итә. Бәйгелә шәхси төҙөүселәр, төҙөүсе, проектлаусы ойошмалар, шулай уҡ заманса төҙөлөш материалдар һәм конструкциялар етештереүҙе үҙләштергән заводтар ҙа ҡатнаша ала. Барлыҡ материалдарҙы һәм документтарҙы май айы уртаһына тиклем Өфө округы хакимиәтенең Баш архитектура һәм ҡала төҙөлөшө идаралығына тапшырыу мотлаҡ.

✓М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты студенты Миләүшә Әғәҙуллина Республика француз йыры конкурсында еңеү яуланы. Киләһе этап - ағымдағы йылдың 4 мартында Екатеринбургта үтәсәк "Фестишан-2013" төбәк француз йыры конкурсында ҡатнашыу. Унда Миләүшә Әғәҙуллина Эдит Пиаф йырын башҡарасаҡ. Екатеринбургта фестивалдә еңеүселәргә Францияға барыу бәхете тәтейәсәк.

*✓ Канаданан килгән көйәрмән Регана Булджера ошондай юлдар яҙған: "Барыһы өсөн дә рәхмәт! Өфө халҡы иҫ киткес шәп! Һеҙҙең беҙгә күрһәткән ярҙамығыҙ был тиклем сиктән ашыр, тип уйламаған да инек..."*

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# БАЛАЛАР УЙЫНДАРЫ...

## халыҡ-ара кимәлдә Өфөлә үтәсәк

**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Рәмил Дилмөхәмәтов журналистарҙы 26 февралдән 3 мартҡа тиклем баш ҡалала уҙасаҡ VI Халыҡ-ара ҡышҡы балалар уйындарына әҙерлек барышы менән таныштырҙы. Матбуғат конференцияһында шулай уҡ баш ҡала округы хакимиәтенең физик культура һәм спорт комитеты рәйесе Сергей Степанов та ҡатнашты.**




- Ете дисциплинаны - тау саңғыһы, шорт-трек, саңғы, сноубординг, спорт ориентиры, фигуралы шыуыу, хоккей (малайҙар араһында) үҙ эсенә аласаҡ VI Халыҡ-ара ҡышҡы балалар уйындары, - тип башланы телмәрен Рәмил Хөрмәт улы. - Өфө командаһы барлыҡ спорт төрҙәре буйынса ла ярыштарҙа ҡатнашасаҡ, уның составы башҡалар менән сағыштырғанда иң ҙуры: 58 спортсы һәм 10 тренерҙан тора. Әлегә тиклем донъяның 19 иленең 58 ҡалаһы командаһынан ҡатнашыу өсөн ғариза килде, улар араһында 30 Рәсәй ҡалаһы бар. Бынан тыш, Көньяҡ Корея һәм Словакия VIP-вәкилдәрен ебәрергә ҡарар итте. Спортсыларҙы, уларҙың тренерҙарын, делегация рәйестәрен һәм башҡаларҙы иҫәпкә алғанда, бөтәһе мендән ашыу кеше килеүе көтөлә. Сит илдәрҙән килеүселәр өсөн виза ярҙамы ойошторолған. Спорт объекттары ярыш үткәреүгә әҙер, әле ҡайһы бер ваҡ мәсьәләләр хәл ителә...

Сығыштарҙан билдәле булыуынса, сараны асыу һәм ябыу тантаналары Спорт һарайында 27 февраль 19 сәғәттә һәм 3 март шул уҡ ваҡытта үтәсәк. Ҡунаҡтарҙы йәшәтеү, ашатыу мәсьәләләре был эшкә яуаплы ойошмалар ярҙамында хәл ителгән, ҡунаҡханаларҙа һәм ярыш урындарында бөтә донъя интернет селтәренә бушлай тоташыу "Уфанет" компанияһы тарафынан тәьмин ителгән. Билдәләнеүенсә, ярыш ваҡытында бөтәһе 25 "Нефаз" автобусы, 600 волонтер һәм 400 полиция хеҙмәткәре йәлеп ителәсәк. Волонтерҙарға айырым тукталып, Рәмил Дилмөхәмәтов күптән түгел Өфөлә уҙған Йәштәр командалары араһындағы хоккей буйынса донъя чемпионатында әле аталған хеҙмәткәрҙәрҙең сит телдәрҙе белмәүе арҡаһында килеп тыуған ҡайһы бер ҡыртыршылыҡтарҙы телгә алып үтте. "Был хәл башҡа ҡабатланмаһын өсөн буласаҡ сараға сит телдәр белгән волонтерҙар йәлеп ителде, йәғни 600 волонтерҙың биш йөҙҙән артыҡы сит телдәрҙе белә", тине Рәмил Хөрмәт улы.

Сергей Степанов матбуғат конференцияһында ҡатнашыусыларҙы Уйындар сиктәрендә баш ҡала мәктәптәре араһында интернет селтәрендә уҙғарылған "Ҙур уйын" проекты менән таныштырҙы.

- Был проект үҙенең форматы буйынса донъяла беренсе тапҡыр уҙғарыла. Ул интернет селтәре аша Өфө балаларын спортҡа ылыҡтырыуы менән ҡиммәтле. Бөгөн проект 6 мендән ашыу интернет гиҙеүсене ҡыҙыҡһындырған. Шулай итеп, беҙ интернетты яҡшы ғәмәлдә файҙаланыу мөмкинлеген арттырабыҙ, - тине Сергей Александрович.

Шулай итеп, баш ҡалабыҙ донъя кимәлендәге ҙур сара уҙғарыу яуаплылығын инде икенсе тапҡыр үҙ иненә алырға әҙерләнә. Былтырғы йыл аҙағы - яңы йыл башы "Өфө-Арена" һәм "Боҙ һарайы" комплекстарында Йәштәр командалары араһында шайбалы хоккей буйынса донъя чемпионаты үтеүе менән тарихта ҡалды. Халыҡ-ара хоккей федерацияһы (IHF) президенты Рене Фазель Рәсәй Хоккей федерацияһы президенты Владислав Третьякка ебәрелгән рәхмәт хатында чемпионатты "яҡшы ойошторолған, көйәрмәндәр хәтерендә оҙаҡ һаҡланыр сара" тип билдәләгән. Ә баш ҡаланың "Ағиҙел" ҡунаҡханаһында тукталған Канада хоккей көйәрмәндәре үҙҙәренең хатында "Ағиҙел" етәкселегенә һәм табиптарға рәхмәт һүҙҙәре яҙып ҡалдырған. Улар шулай уҡ ҡунаҡхана хеҙмәткәрҙәренең ҡунаҡсыл, алсаҡ булыуына һоҡланған. Канаданан килгән көйәрмән Регана Булджера ошондай юлдар яҙған: "Барыһы өсөн дә рәхмәт! Өфө халҡы иҫ киткес шәп! Һеҙҙең беҙгә күрһәткән ярҙамығыҙ был тиклем сиктән ашыр, тип уйламаған да инек..."

Һүҙ ыңғайында иҫкә төшөрөргә кәрәк: VI Халыҡ-ара ҡышҡы балалар уйындарының генераль директоры Ричард Смит та инспектор тикшереүе менән һуңғы тапҡыр Өфөлә булғанында спорт объекттарының Балалар уйындарына әҙерлеген ыңғай баһалағайны:

- Күреүемсә, әҙерлек ҙур тиҙлектәр менән атҡарыла. Башҡортостан был ярыштарҙы юғары кимәлдә ойоштороп, ә ҡатнашыусылар төбәктең ҡунаҡсыллығын тойор, - тигәйне Берлиндан килгән ҡунаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ойоштороусылар Балалар уйындарының бағыусылар тарафынан йыйылған аҡсаға үтеүен, баш ҡала бюджетынан Өфөнөң тышҡы йөҙөн матурлауға ғына сығымдар китеүен, шулай уҡ, ярышҡа бүленгән спонсор ярҙамы менән "Олимпик-парк"та 600 балаға иҫәпләнгән спорт мәктәбе асылыуын билдәләй. Ысынлап та, Өфөлә спорт мәктәптәре, балалар баҡсалары асылыуы, юлдар киңәйтелеүе бөгөн республикабыҙҙа барған яҡшы күренештәрҙең береһе булып иҫәпләнергә хаҡлы. Әммә... Райондарҙа урта мәктәптәр башланғыс мәктәптәргә әйләндерелеүен, һуңғылары бөтөнләй ябылып ҡуйылыуын, уларҙа уҡыған балаларҙың интернаттарға күсерелеүен иҫкә төшөрәһең дә, ошо мәсьәләләрҙә лә бағыусылар ярҙамы менән хәл итергә ине ул, тип ҡыҙығып ҡуяһың...**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## ЫҢҒАЙ ЯҒЫ БИЛДӘЛӘНДЕ

**2015 йылда үткәреләсәк халыҡ-ара саммиттар - Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы ағзалары булған дәүләт башлыҡтары Советы ултырышы һәм БРИКС дәүләттәре һәм хөкүмәттәре башлыҡтарының осрашыуы - Өфө өсөн көнүҙәк булған ҡайһы бер мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә ярҙам итәсәк. Шул уҡ ваҡытта саммиттар айҡанлы ниндәй ҙә булһа объекттар төҙөү планлаштырылмай. Был хаҡта ИТАР-ТАСС агентлығының Өфөләге төбәк бүлексәһендә үткән матбуғат конференцияһында БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Салауат Сәғитов хәбәр итте.**

Вице-премьер әҙерлек сараларын финанслау күләменең яҡынса 60 миллиард һум тәшкил итәсәген билдәләне. Федераль һәм республика бюджеттарынан, шулай уҡ инвесторҙарҙан яҡынса 20-шәр миллиард һум йәлеп ителәсәк. Шул уҡ ваҡытта төбәк бюджетынан социаль өлкәгә йүнәлтелгән аҡса күләме (улар бюджеттың 76 процентын тәшкил итә) үҙгәрешһеҙ ҡаласаҡ, тип ышандырҙы Салауат Сәғитов.

Билдәләнеүенсә, Өфөләге ҡайһы бер объекттарҙы төҙөү һәм реконструкциялау эштәре тиҙләтеләсәк. Шулай итеп, "Өфө" аэропортындағы халыҡ-ара терминалды реконструкциялау сроктары ла алға күсереләсәк. Быгаса "Өфө" аэропорты өсөн аҡса бүлеү 2015 йылға планлаштырылғайны. Саммиттар үткәреү айҡанлы, был ваҡыт күсерелде. "Федераль һауа транспорты агентлығы был эшкә 2,3 миллиард һум күләмендә аҡса бирҙе лә лә инде", - тип хәбәр итте Салауат Сәғитов.

Алдағы ике йыл ярым эсендә Өфөнөң көньяғында урынлашҡан иҫке йорттарҙан граждандарҙы күсереү, "Нефтсе" мәҙәниәт йортон, Башҡорт дәүләт университеты корпусын реконструкциялау мәсьәләләре хәл ителәсәк. "Рәсәй тимер юлдары" асыҡ акционерҙар йәмғиәте аҡсаһы иҫәбенә Өфөнөң тимер юл вокзалын реконструкциялауҙы тамамлау мәсьәләһе ҡарала. Йорттарға капиталь ремонт үткәреү һәм ихаталарҙы комплекслы ремонтлау буйынса эштәр дауам ителәсәк. Өфө ҡала округы хакимиәте мәғлүмәттәренә һылтанма яһап, Салауат Сәғитов, өс йыл эсендә ҡалала 450 йорт һәм 70 ихата төҙөкләндереләсәк, тип хәбәр итте. Ҡунаҡханаларға килгәндә, вице-премьер һүҙҙәренсә, улар инвесторҙар аҡсаһы иҫәбенә төҙөләсәк.

## ВЛАСТЬ МЕНӘН АРАЛАШЫУ

**Төбәктә Башҡортостан Республикаһы власть органдарының Электрон ҡабул итеү бүлмәһе сайты эшләй башланы.**

"Әлеге портал Башҡортостан Республикаһының власть органдары менән аралашыуҙы еңеләйтә, унайлы итә", - тип билдәләй үҙенең блогында Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов.

Сайт аша "Берҙәм тәҙрә" режимында төбәктең барлыҡ министрлыҡтары, ведомстволары һәм Өфө ҡала округы хакимиәте менән бәйләнеш булдырып, уларға туранан-тура мөрәжәғәт итеү мөмкинлеге "Электрон ҡабул итеү бүлмәһе"нең төп өҫтөнлөгө булып тора.

Шулай уҡ мөрәжәғәт итеүсе реаль ваҡыт режимында үҙенең ғаризаһын тикшереү барышын күҙәтә ала. Мөрәжәғәт итеүсенең теләге буйынса ғаризаны асыҡ-тан-асыҡ сайттың махсус бүлегендә урынлаштырырға мөмкин. Бынан тыш, әлеге ресурс тикшереүгә йүнәлтелгән ғаризалар буйынса фекер алышыу майҙансығы ла булып тора. Киләсәктә системаға республиканың барлыҡ ҡала һәм район хакимиәттәре йәлеп ителәсәк, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Хөкүмәтенән.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



### Ҡаты тырнаҡты йомшартыу

Бәғзе берәүҙәрҙең, айырыуса ҡарт кешенең, тырнағы ҡаты була. Уны йомшартыу өсөн кастор майы менән глицеринды 1:1 өлөштә бутарға һәм шуға сылатылған тампондар менән тырнаҡҡа компресс яһарға, иҫке бирсәткә бармаҡтарын кейергә. Мөмкинлек булһа, компресты бер-нисә көн торорға.

### Бит тиреһе майлы булһа

❖ Яңы киҫеп алған кәбестә япрағын йомортҡа ағы менән ҡушып, биткә һәм муйынға 20 минутҡа ҡуйырға.

❖ Иртәнсәк зәғферән (шалфей), әрем, аҡ сәскә, бәйғәмбәр тырнағы (календула), һары мәтрүш төнәтмәһе менән йыуынырға ла була. Кисен битте кәбестә һуты менән ышҡырға.

### Алһыу клевер

❖ Аҙ ҡанлылыҡтан, ҡурылдайҙан, тын ҡыҫылғанда 3-4 ҡалаҡ кипкән үләнде 200 мл ҡайнар һыу ҡушып, 6-8 сәғәт термоста төнәтергә. Көнөнә 3-4 мәртәбә 50 мл эсергә.

❖ Ныҡ йүткергәндә 40 грамм кипкән үләнде 200 мл ҡайнар һыуҙа 1 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 3-4 мәртәбә 50 мл эсергә. Тын юлы ла йомшара, йүтәл дә кәмей.

### Ҡурай еләге менән мәтрүшкә

❖ Тирләү, ҡаҡырыҡ сығарыу, тыныс йоҡлау өсөн 70 грамм ҡурай еләген һәм 30 грамм мәтрүшкәне бергә ҡушырға, ваҡларға. 2 ҡалаҡ үлән ҡатнашмаһын сәйнүккә һалып, ярты литр ҡайнап торған һыу ҡойорға, төнәтергә. Йылы көйөнсә көнөнә 3-4 мәртәбә 100 мл эсергә.

### Ер еләге япрағы

❖ Бауыр, бөйәр ауыртһа, рахит, геморрой, гастрит, һары ауырыуы (золотуха) булғанда 20 грамм кипкән еләк япрағын 400 мл ҡайнар һыуға һалырға, 30 минут самаһы төнәтергә, һөҙөргә һәм көнөнә 4 мәртәбә 100 мллап ашар алдынан эсергә

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ 2012 йылда республикала 34229 никах һәм 17837 ғаиләнең тарҡалыуы теркәлгән. Һуңғы йылдарҙа никахҡа инеүселәрҙең йәше уртаса 25-29, ә айырылышыусыларҙыҡы - 25-47 йәш.



УҠЫТЫУСЫҒА ҠУЛЛАНМА



# ДИН ҺӘМ МӘҘӘНИӘТ

## Егерме өсөнсө, егерме дүртенсе дәрестәр: "Ислам мәҙәниәте нигеҙҙәре"

Атай-әсәйҙәр һәм балалар араһындағы мөнәсәбәт бик ҡатмарлы. Баланы өй генә түгел, ә мөхит тә тәрбиәләй. Шуның өсөн ҡатмарлылыҡ фәҡәт беҙҙең ғаиләлә, беҙҙең мөнәсәбәттә генә, тип ҡарарға ярамай, ә ошолай булырын иҫәпкә алып, һәр бөләкәй генә мәсьәләне лә ваҡытында хәл итеп, аңлашып барырға кәрәк. Был йәһәттән, әлбиттә, төп хәл итеүсе - атай менән әсәй. Халҡыбыҙҙа "Бала менән бала булма" тигән фәһемле мәҡәл бар. Тимәк, һин балаң аҡылы менән түгел, ә уны аңлап, тәжрибә туплаған, балаға ҡарағанда күберәкте күргән һәм кисергән ололар аҡылы менән хәл итергә тейешһең. Һуңғы ваҡытта ҡайһы бер атай-әсәйҙәр эшһеҙлек арҡаһында сит-ят тарафтарға сығып китә, ғаиләһенән ситләшә башланы. Шулай уҡ атай-әсәй елкәһендә ятыу кеүек күренештәр йышайҙы. Ошондай һәм башҡа ыңғай һәм кире күренештәр тураһында айы сыҡҡан һайын фекер алышып, уҡыусының үҙенән һөйләтеп, уларҙың күңеленә яҡтылыҡ, өмөт, үҙ-үҙенә ышаныс осҡоно һала барырға кәрәк. Бала, үҫмер ниндәй генә шарттарҙа ла юғалып ҡалмаһын, әҙер бәхет көтмәһен, тормоштан һәр саҡ һабаҡ ала барһын, үҙен оло тормошҡа әҙерләһен.

Хәҙис шәриф:
Әсәһенең ҡарашында
Бала һәр саҡ өмөт күрер.
Балаһына ризыҡтарын
Ауыҙынан өҙөп бирер.

## Егерме өсөнсө, егерме дүртенсе дәрестәр: "Донъя диндәренең мәҙәниәт нигеҙҙәре"

Байрамдар һәм календарҙар. Башҡа темаларҙы үткән саҡтағы кеүек үк, был тема буйынса иң яҡшыһы - дәфтәргә теҙеп яҙып ҡуйыу. Йәһүд, христиан, ислам, буддизм диндәренә хас байрамдар тураһында алдағы дәрестәрҙә телгә алып үткәйнек инде. Уларҙы иҫкә төшөрөп, яҙып ҡуйһындар. Улар буйынса "Тормош һабаҡтары"ның етенсе класс дәреслегендә "Дин тураһында төшөнсә" булегендә лә байтаҡ ҡына мәғлүмәттәр алырға мөмкин.

## Егерме өсөнсө, егерме дүртенсе дәрестәр: "Донъяуи этика нигеҙҙәре"

Намыҫлылыҡ. Фәйләсүф Демокрит иң беренсе булып намыҫлылыҡ төшөнсәһен аңларға һәм аңлатма бирергә тырышҡан. Ә ул заманда хатта был һүҙ бөтөнләй булмаған. Намыҫлылыҡ сифаты тәрбиәле кешене баһалай торған бер төшөнсә ул. Башҡорт халҡы намыҫ тигән төшөнсәне бик юғары ҡуйған. Шуның өсөн дә намыҫ тураһында мәҡәлдәр күп. Ирҙәрен, уландарын һуғышҡа оҙатҡан сакта ҡатындары, әсәйҙәре "Үҙеңде һаҡла" тип түгел, ә иң элек "Намыҫыңды һаҡла!" тигән теләк әйткән. Тимәк, намыҫыңды юғалтыу үлемдән ауырыраҡ ҡайғы. "Ул намыҫлы кеше" тип әйтәләр икән, тимәк, бер һүҙле, биргән һүҙендә тора, алдамай, ике йөҙләнмәй, уйлап эш итә һәм үткәндәре өсөн үкенесһеҙ итеп йәшәй белә, ундай кешегә ныҡлы таянырға була, тигән фекер һалына. Ҡайһы бер кеше һүҙгә генә намыҫлы булып ҡылана. Асылда иһә, үҙе һөйләгәндең киреһен эшләй. Ундайҙар тураһында: "Коро намыҫ бит йыртa", - тиҙәр. Тимәк, бындай холоҡ тиҙ үк беленә һәм намыҫына көс килә, йәғни йөҙө бысрана - "бит йыртa". Тағы шундай мәҡәлдәр: Намыҫыһыҙҙың ауыҙы алаптай, йөҙө ҡаптай. Ҡуянды ҡамыш үлтерә, ирҙе намыҫ үлтерә. Намыҫ аҡсанан ҡиммәт. Намыҫлы кеше - ырыҫлы кеше. Намыҫлы ир хур булмаҫ. Намыҫ юғалтыу - үҙеңде юғалтыу.

"Урал батыр" эпосынан намыҫ хаҡында әйтелгән юлдарҙы табып уҡығыҙ һәм намыҫын тапаған кешенең ниндәй хәлдә тороп ҡаласағы тураһында фекер алышығыҙ. Намыҫлы тигән һүҙгә синонимдар яҙығыҙ. Намыҫһыҙ тигән һүҙгә синонимдар яҙығыҙ.

Мәрйәм БУРАҠАЕВА.

ҮӘТ БИТ ӘЙ!

# ТЫУЫМ АРТА...

## үлем кәмей



**Тормош юлын бергә үтергә ҡарар иткән йәштәрҙең, балаға тыуыу тураһында таныҡлыҡ алырға теләүсе ата-әсәләрҙең, теге йәки был туғаның үлемен теркәүселәрҙең, ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында исем-шәрифен үҙгәртергә теләүселәрҙең юлы бер урынға - ЗАГС-ҡа, йәғни Граждандыҡ хәле акттарын теркәү идаралығына - бара. Былтыр Идаралыҡҡа күпме кеше мөрәжәғәт иткән? Никахлашыу һаны артҡанмы? Балаларға ҡушылған исемдәр араһында иң билдәлеләре ниндәй? Ошо һәм башҡа һорауҙарға журналистар менән осрашыуҙа Идаралыҡ етәксеһе Әлмира Рәйес ҡыҙы СОЛТАНОВА яуап бирҙе.**

Республикала халыҡтың тәбиғи үҫеше күҙәтелә, тине Әлмира Солтанова үҙ сығышында. Республиканың ЗАГС идаралыҡтарында теркәлгән 176253 граждандыҡ акттары тураһындағы дөйөм яҙыуҙың 59542-һе тыуыу тураһындағы таныҡлыҡҡа тура килә. Ә үлемдә теркәү акттарының һаны -53537. 2011 йыл менән сағыштырғанда, тыуым 5,7 процентҡа артҡан, ә үлем 1,9 процентҡа кәмегән.

Балаларға ҡушылған исемдәрҙә айырыуса Рамаҙан, Сыңғыҙ, Тимур, Әмир, Арыҫлан, Аҫҡар, Алина, Камила, Әминә, Йәсминә (Ясмина), Аделина кеүек исемдәрҙең йыш осрауын, ә Айна, Юлдаш, Асель, Мостафа, Зәйнәб һәм Байрас исемдәре һирәк булыуын билдәләне Әлмира Рәйес ҡыҙы. Шуныһы ҡыуаныслы: былтыр, 2011 йылдан айырмалы рәүештә, ғаиләләрҙә икенсе, өсөнсө һәм унан һуңғы балалар күберәк тыуған.

2012 йылда республикала 34229 никах һәм 17837 ғаиләнең тарҡалыуы теркәлгән. Идаралыҡтағы никахлашыусыларҙың һәм никахын тарҡатыусыларҙың йәш буйынса мониторингына ярашлы, һуңғы йылдарҙа никахҡа инеүселәрҙең йәше уртаса 25-29, ә айырылышыусыларҙыҡы - 25-47 йәш. Бер йылдан алып биш йылғаса бергә йәшәгән ғаилә ағзалары араһында никахын тарҡатыусылар айырыуса күп булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды Идаралыҡ етәксеһе. Ә бына күптәрҙең, 18 йәшкә тиклем өйләнеү күп осраҡта айырылыуға килтерә, тигән фекерен инҡар итеп, Әлмира Солтанова был категория араһында айырылышыу осраҡтарының һирәк булыуын белдерҙе. Ә шулай уҙа 18 йәше тулмағандар араһында өйләнешеү осраҡтары ла һуңғы ваҡытта йышайған. Әлмира Рәйес ҡыҙы белдереүенсә, никахтарҙың иң күбе июнь-сентябрь, ә иң әҙе май айында теркәлә. Бөтә донъя буйынса күҙәтелгән матур һандар көнөндә өйләнергә теләү тенденцияһы ла республиканы ситләтеп уҙмай. Мәҫәлән, 2012 йылдың 12 декабрендә бөтәһе 315 никах теркәлгән һәм уларҙың 103-ө - Өфө ҡалаһында.

Күптәр бөгөн никахлашыу урыны итеп паркты, йылға ярын, теплоход, хатта һауа шарын һәм башҡа урындарҙы һайлай. Идаралыҡ етәксеһе белдереүенсә, бындай никахтар юридик законға эйә түгел һәм йәштәр мотлаҡ рәүештә йә тантанаға тиклем, йә унан һуң ЗАГС органдарына барып, рәсми рәүештә никахын теркәргә бурыслы.

Элек кейәүгә сыҡҡан ҡыҙҙың ире фамилияһын алыуы ғәҙәти күренеш булһа, бөгөнгө көндә үҙ фамилияһында ҡалған кәләштәрҙең һаны ла әҙ түгел икән. Кәләшенең фамилияһын үҙгәртергә теләмәүен ир-егеттәр ҙә тыныс ҡабул итә хәҙер, тип белдерҙе Әлмирә Рәис ҡыҙы.

Идаралыҡта теркәлгән башҡа граждандыҡ акттарына ярашлы, былтыр 8359 ир-егет атайлығын раҫлаған, уллыҡҡа йәки ҡыҙлыҡҡа 391 бала алынған һәм 2358 кеше төрлө сәбәптәр арҡаһында исем-шәрифен үҙгәрткән.

ЗАГС органдары төрлө граждандыҡ акттарын теркәү менән бер рәттән, ғаиләгә ҡағылышлы төрлө тикшереүҙәр ҙә уҙғара. Мәҫәлән, былтыр Башҡортостанда никах һәм айырылышыу тенденцияларын тикшереүҙе асыҡлаусы һорау алыуҙар үткәрелгән. Тикшереү һөҙөмтәләренән күренеүенсә, республикала законлы никахҡа инмәй йәшәгән йәштәр күбәйгән. 2002 йыл менән сағыштырғанда бөгөн был һан 8-10 процентҡа күберәк. Үҙҙәренең был аҙымын респонденттарҙың яртыһы тойғоларын тикшереп ҡарау теләге менән аңлатҡан. Шулай уҡ улар был осраҡта яуаплылыҡтың әҙ һәм айырылған осраҡта еңел булыуын да билдәләгәндәр.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һәр һан артында кеше яҙмышы тора. Шуға күрә уларға ҡоро факт булараҡ ҡына түгел, ә республиканың бөгөнгөһөн һәм киләсәген билдәләүсе факторҙар итеп ҡарау мөһим. Йылдан-йыл ЗАГС органдарында тыуыу тураһындағы таныҡлыҡтарҙың, бәхетле никахтарҙың күберәк, ә айырылышыу һәм үлем тураһындағы граждандыҡ акттарының аҙерәк теркәленгән теләргә генә ҡала.**

Гөлназ МАНАПОВА.

ШАҢДАУ

# ҠАРТТАР ЯЛ ИТҺЕН...

## ә йәштәр эшле булһын



**Мин Башҡортостандың төпкөлөндә ҙур башҡорт ауылында йәшәүсе ябай гәзит уҡыусыһымын. "Киске Өфө"гә төплө фекерле ҡыйыу журналистарҙың яҙғандарын уҡығандан һуң тыуған уйҙарымды яҙып үткем килә.**

Мине ауылдағы халыҡтың "моңһоҙ", үҙ киләсәген ҡайғыртмай йәшәүе борсой. Бына нисәмә йылдар инде эшһеҙлектән миктәй ауыл, шул арҡала ирҙәр Себергә юллана, йәштәр ҡалаға һыпырта. Бөтәһенә лә фермер булырлыҡ йәки магазин асырлыҡ һәләт бирелмәгән шул. Был хәл бер беҙҙә генә түгел, әлбиттә. Әммә был хәлдә аҙмы-күпме еңеләйтеүҙең юлдары барҙыр бит инде ул? Бына, мәҫәлән, район буйынса бюджет өлкәһендә эшләгәндәрҙе генә алһаҡ та (уҡытыусы, табип, почта хеҙмәткәре) - уларҙың күбеһе хаҡлы ялдағылар. Улар урынында эшләрлек йәш белгестәр быуа быуырлыҡ, ләкин пенсионерҙар ялға китергә, урындарын йәштәргә бирергә теләмәй. Һәйбәт тә инде: пенсия ла килә, эш хаҡы ла бара. Ҡалаға китеп бөткән балаларына өй, машина кәрәк, үҙҙәренә тун алыштырыу кәрәк. Малдарына ашатыр өсөн көрпәне лә улар махсус рәүештә район үҙәгенә барып алалар, сөнки аҡса күп, ә йәш ғаиләләр бер тоҡ он алырға аҡса таба алмайҙар. Әлбиттә, бер урында оҙаҡ йылдар эшләгән кеше тәжрибәле, эште белә, отчеттарын да ваҡытында тапшыра. Шуға уларҙы ошо эшендә тотоу хужаларға ла ҡулайлылыр. Ләкин...

Ошо пенсионерҙар урынына йәш белгестәр килһә, ауылдарға йәш ҡыҙҙар һәм егеттәр ҡайтһа, яңы ғаиләләр барлыҡҡа килер, балалар һаны артып, мәктәптәр ҙә ябылмаҫ ине. Ғөмүмән, ауыл йәшәрер, үҫер ине. Иманым камил, был хәл тик беҙҙең ауылға ғына түгел, ә бөтә Башҡортостанға хас күренеш. Һәр ауылда ла, кәм тигәндә, 6-7 пенсионер эшләп йөрөй. Әйтергә кәрәк, улар араһында бер ҙә тракторист йә һауынсы юҡ, сөнки эше ауыр. Ә уҡытыусы, фельдшер булып эшләүсе пенсионерҙарға ни, эш урынына 5-6 сәғәткә барып ҡайтыуы ял итеүгә генә тиң.

Тағы шул борсой. Йылан йәшәй-йәшәй аждаһаға әйләнә, тиҙәр. Ҡарт уҡытыусылар һәр балаға ла кеше, шәхес итеп ҡарамай, ә уның ата-әсәһенә булған ҡараштан сығып мөнәсәбәтен ҡора, баһа ҡуя. Ғөмүмән, әгәр ҙә беҙ заманға яраҡлашҡан, әүҙем балалар үҫтерергә теләһәк, мәктәптәр пенсионерҙарҙан азат булырға тейеш. Улар урынына яңыса фекерләгән, яңы алымдар ҡулланып эшләгән уҡытыусылар кәрәк. Пенсия йәшенә еткәнһең икән, рәхим ит - урыныңды йәштәргә бир. Әгәр ҙә көн үткәрә алмайһың икән, ағиңәй, аҡһаҡал булып, иман нурҙары таратып, намаҙға баҫ. Ғүмерҙе донъя байлығы ғына уйлап үткәрергә ярамай, иман байлығын хәстәрләү ҙә кәрәк. Нәфсе бер ҡасан да туймай ул. Бына шулай. Йәштәрҙе, ялҡауҙар, тип әрләгәнсе, уларға эш менән ярҙам итәйек, тип кенә әйтмәксе инем.

Әминә ӘМИНЕВА.
Хәйбулла районы.

✓ ***Башҡортостандың көнсығышында һәм Урал тауҙары ҡуйынында йәшәгән төп халыҡ Рәсәй империяһының тау сәнәғәтен тыуҙырыуға, булдырыуға, йәшәүенә, көсәйеүенә төп иҡтисади ҡеүәт биргән.***

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# ШӘРЕҠТӘН - ҒӘРЕБКӘСӘ,

## йәғни Урал аша үткән ырыуҙар юлы



### Өфө өйәҙе барлыҡҡа килеүе

Көнбайыш һәм төньяҡ Башҡортостанды Урыҫ империяһы үҙенә ҡушҡас, Өфө ҡалаһында нығынып, Ҡаҙан яғы менән бәйләнеш булдырғас, башҡа көслө дәүләттең ҡурсауы юҡлығынан файҙаланып, улар Урал аша көнсығышҡа ынтыла. Әммә Ләмәҙе буйында, ғөмүмән, Урал һыртының көнбайышында, еңелеүгә осрағас, улар Урта ер аша Ибер киңлектәренә сыға. Әммә ныҡлы юл һала алмайҙар әле. Юл һалыр өсөн ниндәйҙер хакимиәтлек кәрәк була. Ә ул юҡ. Эшләр өсөн бүленеш ойошторорға кәрәк. Һәр бүленештең етәксе, һаҡсы, баҫҡын, хөкөм һәм башҡа ағзалары булыуы мотлаҡ. Беҙҙең ерҙәр Өфөнән ярайһы уҡ йыраҡ булғанлыҡтан, 1637 йылда Себер приказы ойошторола. Ә көнсығыш башҡорттары Себер приказын танымай. 1586 йылда Өфө өйәҙе барлыҡҡа килә. Ә унан Башҡорт (иле) ере менән идара итеү өсөн дүрт йүнәлеш билдәләйҙәр: Ҡаҙан, Оса, Нуғай һәм Себер юлдарын.

Ә.З.Әсфәндийәров үҙенең "Башкирия после вхождения в состав России в 1560-1850 гг." тигән китабында Себер юлына 17 олоҫто индерә. Әммә беҙ унда Тиләү-Табын, Барын-Табын тип яҙылған олоҫ күрмәйбеҙ. Ҡара табындарҙың бер өлөшө 1608 йылда уҡ урыҫ хакимиәтен таный. Киреһенсә, ҡалған Көнсығыш Табын ырыуҙары Себер даруғаһында төҙөлгән хакимиәтте танымай, 1730 йылдарға тиклем сағыштырмаса үҙаллы йәшәүҙәрен дауам итә. Шуғалыр ҙа инде, ҡулға эйәләшкән ҡара табындар исеме менән олоҫ төҙөгәндәр һәм уға башҡа халыҡ ерен дә кереткәндәр. Урыҫ хакимлығын танымаған ҡара табынлы Бүре солтан, үҙ кешеләре менән тиләүҙәр, барындар араһына күсеп, нәҫелдәре хәҙер ҙә унлаған ауыл булып, беҙҙең менән йәшәп ята. Әммә был ваҡиға даруғалар керетелгәнгә тиклем була. Башҡортостандың башҡа өлөштәрендәге юлдарына Ә.З.Әсфәндийәров ентекле аңлатма бирә.

Маҡсатым - үҙ төбәгебеҙҙәге юлдарҙы яҙыу. Әммә был юлдарҙың географик урынын, тәғәйенләнешен аңлау өсөн уҡыусыға өс төшөнсәне белеү, күҙаллау мөһим. Беренсеһе - бөгөнгө административ бүленеш юҡлығын күҙ алдына килтереү кәрәк. Бары тик Ялан Ҡатай, Ҡыуаҡан-Табын, Барын-Табын, Тиләү һәм Күбәләк-Табын ерҙәрен генә уйларға кәрәк. Һуңғараҡ Ырымбур губернаһы Троицк, Верхнеурал өйәҙе, Исәт провинцияһы ерҙәрен күҙаллау, географияны белеү зарур. Бына шул урындағы тарих халҡыбыҙҙың оло тарихына таяу булһын өсөн яҙыла. Быны йәш быуын белергә тейеш.

Башҡортостандың көнсығышында һәм Урал тауҙары ҡуйынында йәшәгән төп халыҡ Рәсәй империяһының тау сәнәғәтен тыуҙырыуға, булдырыуға, йәшәүенә, көсәйеүенә төп иҡтисади ҡеүәт биргән. Ҡеүәт биргән, тигән һүҙем шул: ерenең мәғдәнен аҫҡан, күрһәткән, биргән, эшсе көсө менән төҙөшкән. Әлбиттә, тимер, баҡыр, алтын һәм башҡа күп байлыҡ урындары баҫып алынған, кешеләре йә ҡыуылған, йә ҡол ителгән. Шулай ҙа беҙҙең төбәктә ерҙәр, нигеҙҙә, үҙ исемдәре менән ҡалған. Әлбиттә, оккупация география, тарих өлкәһендә бик көслө барған. Һәм ул бөгөн дә дауам итә. Ләкин ҡайһы бер атамалар урыҫтар килгәнгә тиклем үк быуаттар ашаһынан беҙгә билдәле.

Беҙҙең төбәк аша үткән боронғо юлдарҙың атамалары түбәндәгеСә: 1. Шәреҡ юлы (Ефәк юлы). 2. Ырыу юлы. 3. Һуғыш юлы. 4. Ристан юлы. 5. Кәтерин юлы. 6. Ям юлы.

### Шәреҡ юлы

Көнсығыш менән көнбайышты тоташтырыусы иң оҙон юл - Шәреҡ юлы буйлап Бумын ҡаған, һундар, Төмән ҡаған, Сыңғыҙхан төмәндәре, Батый хандың мағул төркиҙәре ғәскәре үткән. Был юл халыҡтарҙың оло күсенеүенә шаһит. Был юл - Алтайҙан Уралғаса. Урал артында, Булыға буйҙарында ул юл боронғо заманда нисек аталғандыр, әммә табындар хәтеренә ул Шәреҡ юлы тип һеңешкән. Яуҙар, күсенеүҙәр үтеү менән Уралды, Себерҙе, Алыҫ Көнсығышты Рәсәй империяһы баҫып алғанға тиклем биш йөҙ йыл самаһы ул көнсығыш менән көнбайыштың алыш-биреш, сауҙа юлы була. Һиндостандан, Ҡытайҙан, Уйғыр, Ҡараит һәм Алтай илдәренән сәй, ефәк (ебәк), көҙгө, энә, еп, емеш, биҙәнеү әйберҙәре һ.б. бик күп тауарҙар килгән. Былар бөтәһе лә, әлбиттә, дөйә һәм ат арҡаһында килтерелә. Шулай итеп, Шәреҡ юлы Ефәк юлына (Шелковый путь) әйләнә. Каруанға, ниндәй булыуына ҡарамаҫтан, туҡтап, ял итеп, ашап-эсеп алыу өсөн кешеләр йәшәгән тораҡ ерҙәр, ултыраҡтар кәрәк була. Элек, хәҙерге кеүек, шырпы ла, зажигалка ла булмай. Ҡайҙа кеше торағы, шунда - ут, йылылыҡ, яғыулыҡ, ит-һурпа. Алтайҙан алып Уралға һәм Булығаға (Волга) тиклем йәшәгән төрки-мағулдар ерендә утһыҙ һәм итһеҙ ултыраҡ булмаған. Шунда уҡ алыш-биреш тә барған. Шәреҡ юлы, һис шикһеҙ, башҡорттарҙың ҙур ултырағы Ҡурған, Ҡаҙаҡ ерендә Ҡостанай (Кустанай) аша үтмәй булмағандыр. Ул ваҡытта Ҡурған, Силәбе, Өстамаҡ (Троицк), Мейәс, Алтынтамаҡ (Златоуст) кеүек ҡалалар береһе лә булмай. Ғөмүмән, төрки халҡы үҙ ерендә бер урыҫты ла күрмәгән осор була был. Көнсығыштан көнбайышҡа сауҙа өсөн тауар үтһә лә, көнбайыштан көнсығышҡа бер нәмә лә үтмәй. Әгәр баҫҡынсы ҡасаҡ башкиҫәр казактарҙың Ҡаспый (Каспий) аша Иран ерҙәренә һөжүмен иҫкә алмаһаҡ, Рәсәй тарихында көнсығышҡа барған Тверь ҡалаһы сауҙагәре Афанасий Никитиндың ғына яҙмалары бар. Шәреҡ (Ефәк) юлы Ҡурған йә Ҡостанай аша тағы ла бер ҙур башҡорт ултыраҡ-нығытмаһы Өстамаҡҡа теймәй үтмәй. Ул нығытма Уйҙың Тубылға ҡушылған ерендә була. Аҙ ғына алдараҡ Уйға Өйәл ҡушыла. Урыҫтар хәҙер уны Увелка тип йөрөтә. Көнсығышҡа сығыу ере боронғо башҡорт ҡаласығы-нығытмаһы Өстамаҡ (Троицк) тиктән-тиккә нигеҙләнмәгән. Ҡап-ҡаҡ ергә килеп ҡала-нығытма һалыу башланмай. Троицк ҡалаһының гербы бөгөн дә - ҡалҡан. Ефәк юлы Барын ере аша Урал арҡыры көнбайышҡа үтә. Ваҡыт, быуаттар үтеү менән, уның төп юлы ла үҙгәрә. Ҡурған, Силәбе нығытмалары хасил булғас, ул шул ерҙәр аша үтә лә, империя хакимлығы Себергә таралғас, Ефәк юлы эшләүҙән туҡтай.

Көнсығыш каруан менән Рәсәйгә килмәй. Юлдары Урта Азияға - һулға борола. Рәсәй империяһының хакимлығы Себерҙә Иберҙә, Уралда нығынғас, Төмән, Томск, Ҡурған, Новосибирск, Иркутск ҡалалары барлыҡҡа килгәс, Шәреҡ (Ефәк) юлы Себер юлына әүерелә. Себер юлы төрмә, каторга юлы тигән мәғәнә ала. "Башы Себер китте, Себергә ҡыуҙылар, Себерҙә каторгала", тиҙәр. Был юлға башҡорт иҫе, табындар хәтере тик каторга мәғәнәһен генә һала. Был мәғәнә табындар хәтеренән яйлап тик 1930-1940 йылдарҙан һуң ғына юйыла башланы. Ә хәҙерге аң менән, Себергә киткән, тиһәк, тик эш тураһында уйлайбыҙ: "Себергә эшкә киткән". Шулай үҙгәртә халыҡ хәтерен быуаттар.

**Спартак ИЛЬЯСОВ.**

**(Дауамы. Башы 5-се һанда).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

Башҡорттар араһында һауыт тип аталған һуҡма тоҙаҡ киң таралыу таба. Ҡуян, төлкө тотоу өсөн ҙур һауыттар ҡулланыла, ә аҫ, шәшке, йәтсә өсөн бәләкәйҙәре ҡулланыла. Был тоҙаҡтың ҡоролошо ҡатмарлы була. Ул эсе соҡоп алынған һауыт көпсәктән (а) тора. Уның эсенә ике эптән үрелгән бау урынлаштырыла. Бәләкәй һауыттарҙа ул киндерҙән үрелә, ә ҙурҙарында - тарамыштан. Был үрелгән, ҡалаҡтарҙы (б) тарттырған бау һуҡма уҡ (д) өсөн пружина булып хеҙмәт итә. Цилиндрҙың уртаһынан алғы яҡта талдан тар ғына дуға - бөгөл ян (в), ә арттан атҡыс ағас (г) урынлаштырыла. Бәләкәй йәнлектәргә әҙерләнгән тоҙаҡта дуға уҡ килеп тейгәс, йәнлек уның тишегенә барып төшмәһен өсөн һалабаш менән уратыла. Ҙур һауыттың бәләкәйенән икенсе айырмаһы шунан ғибәрәт: беренсеһендә уҡҡа ябай тимер сөйҙәр беркетелә, икенсеһендә - тимер тештәр (е) ҡуйыла. Һауыт ағас тәте (ж), төйәк ярҙамында урынлаштырыла. Тәте ат ялы (з) ярҙамында дуғаның башында нығытылған сыбыҡ (и) менән тоташтырыла (һүрәт).



Һауыт йәнлектәр йөрөгән урындарға дуға тап һуҡмаҡҡа тура килерлек итеп һалына. Тоҙаҡ та, дуға ла ҡар менән күмелә. Быны өсөн махсус тар һәм оҙон көрәк ҡулланыла.

Тоҙаҡтың тағы бер төрө атма тип атала. Тибы буйынса ул һаплы йәйәнең бер төрө булып, буҫағанан һәм йәйәнән тора. Буҫаға эсенә тел ҡуйыла, ул уҡтың маҡсатын үҙенә ала. Атма нигеҙҙә аҫтарҙы тотоу өсөн һуҡмаҡтарҙа, ағас ҡыуышында урынлаштырыла. Миңә мәғлүм булыуынса, XIX быуаттың икенсе яртыһынан башҡорттар йәйәләрҙе бер ниндәй йәнлеккә лә ҡуймаған. Шуға ҡарамаҫтан, башҡорттарҙың айыуға ҡорған был ҡоралын И.И. Лепехиндың һүрәтләүе ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра: "Улар айыуҙың бер ниндәй ҡурҡытыуҙарға ҡарамай солоҡҡа килеүен шәйләһәләр, улар ҡаҙы тип аталған ябай тоҙаҡ эшләй (2-се һүрәт). Солоҡ урынлашҡан ағасты ҡаҙыҡтар менән уратып алалар (а) һәм ситән үрәләр. Айыу солоҡҡа килә торған урында ике аршин самаһы асыҡ ишек ҡалдыралар. Уның бер яғынан оҙон буйлы кешенең тубығы тирәһенән булған ҡаҙыҡ ҡағып (b), уның тураһынан бер сажин тирәһе ситтә икенсе ҡаҙыҡты ҡағалар (c) һәм уларҙың икеһен дә арҡыры һалынған ҡаҙыҡ - сит ҡаҙыҡ (d) менән нығыталар. Сит ҡаҙыҡтан ситтәрәк, ике сажин тирәһе алыҫлыҡта тағы ике ҡаҙыҡ ҡағып (e, f) улар араһына сей ҡараманан һайғау (g), ян беркетелә һәм уның осона (k) штау (тышау) (i) һалына. Тышауға кенде (кендек?) бәйләнә. Ул ян тартылыу менән сит ҡаҙыҡҡа яһалған киртектә урын ала. Яндың икенсе яғында сит ҡаҙыҡ менән бер линияла уның оҙонлоғонда йыуан уҡ йәки һөңгө (m) урынлаштырыла. Кендектең осона нәҙек кенә еп бәйләнә һәм шулай уҡ ҡаҙыҡҡа нығытыла, әммә ул тартылып тормай, ә бушағыраҡ була. Ишек (pp) еп (q) күренмәҫлек итеп ҡоро-һары сытыр менән ҡаплана. Айыу үҙенең ғәҙәте буйынса ишек аша солоҡҡа яҡынлашыу өсөн сытырҙы этәргәндә епкә тейә. Һөҙөмтәлә кендек (n) ысҡына. Ян бар көсөнә уҡты ата һәм ул айыуҙың ҡабырғаһын йәки күкрәген тишеп үтә. Айыу йә шунда уҡ, йә бер аҙ барғас йән бирә.



***✓ Ванга, кешелек умарталағы бал ҡорттары үлеп бөткәс, юҡҡа сығасаҡ, тип әйтеп ҡалдырған. Бында тәбиғәттең, кешенең, бал ҡортоноң тормошо бер бөтөндө тәшкил итеүен күҙалларға була.***

# Тәбиғәт,

## Мин дә -

(Башы 1-се биттә).

**Һеҙҙең республикабыҙҙың экологик хәленә биргән тәүге баһағыҙ нисегерәк булыр? Әйтәйек, кешенең тәбиғәткә элекке мөнәсәбәте менән хәҙергеһе нисек айырыла?**

**Ә. Ишемғолов:** Һүҙебеҙҙе халҡыбыҙ тарихынан башлайыҡ. Ырыуҙар вәкилдәре үҙенең ырыуын атаған ваҡытта һәр төрлө күрһәткестәр менән бер рәттән, "ҡошом - шул", "ағасым - шул", "тауым - шул", "эскән һыуым - шул" тип тә әйткән һәм әйтә. Был юҡҡа ғына түгел. Сөнки тәбиғәтте үҙенең ырыуы, йәғни асылы, булмышы менән бәйләп йәшәгән халҡыбыҙ. Ошонда уҡ тәбиғәткә мөнәсәбәт тә ята. Тимәк, башҡорт кешеһе үҙен уратып алған тәбиғәтте үҙ ырыуындай, туғандарындай яҡын күргән һәм һаҡлаған. Боронғо тарихыбыҙҙан билдәле булыуынса, ислам дине килгәнсе үк халҡыбыҙ тәбиғәтте ҡәҙерләп, табынып йәшәгән.

Быйыл миңә Бөрйәндән Ишембай районы аша Өфөгә ҡайтырға тура килде. Шунда элек матур ғына булып ағып ятҡан йылғаның юҡҡа сығыуына шаһит булдыҡ. Ул йылға юҡ, сөнки уны тулыландырыусы шишмәләр ҡороған. Бындай күренештәргә Урал тауҙары буйлап йөрөгәндә йыш осрайһың. Элек беҙ күперҙәрҙән баш менән сумып һыу ингән урындарҙы хәҙер тауыҡ кисеп кенә сыҡмалы. Элек Салауат батыр һәйкәле янына барып баҫһаҡ, Ағиҙел буйлап пароходтар сәләм биреп уҙа ине, хәҙер уны балыҡсылар кисеп кенә сыға. Был күренештәр барыһы ла тәбиғәтте һаҡларға саҡырып, оран һалырға ваҡыт еткәнен аңлата.

Хәҙерге ваҡытта Сәғүд Ғәрәбстаны эсергә яраҡлы һыуҙың 3 процентын ғына үҙ еренән таба. Ә ҡалған 97 процент һыуҙы ситтән ташыйҙар йә тоҙло диңгеҙ һыуын эшкәртеү юлы менән тәьмин итәләр. Эшкәртелгән һыу йомшаҡ, әммә уның бер ниндәй ҙә тәме юҡ. Беҙ әлегә үҙебеҙҙе һыу менән тәьмин итеү буйынса ундай уҡ ҡытлыҡ кисермәйбеҙҙер, әммә мәсьәләне үҙағышына ҡуйһаҡ, киләсәктә беҙҙә лә һыу проблемаһы киҫкен тороуы бар.

**Ә.Ғәббәсов:** Совет осоронда тәбиғәтте, һыу ресурстарын, урмандарҙы һаҡлауға етди иғтибар бирелә ине. Советтар Союзы юҡҡа сыҡҡас, мәсьәлә үҙағышына ҡуйылды. Үткән быуаттың 90-сы йылдарында күп кенә завод-фабрикалар, предприятиелар эшләүҙән туҡтағас, тәбиғәт бер аҙ иркен тын алып ҡалды һәм иң беренсе нәүбәттә был күренеш һыу сифатының яҡшырыуына алып килде. Был йәһәттән элек дүртенсе класҡа тиклем бысранған Ҡариҙел, Ағиҙел йылғалары таҙара төшөп, ун өсөнсө класҡа төштө. Быға шулай уҡ предприятиеларҙың һыуҙы бер нисә тапҡыр ҡулланыу технологияһын үҙләштереүе лә булышлыҡ итте. Беҙгә әле предприятиелар ҡарамағындағы һыу таҙартыу ҡоролмаларын камиллаштырыу, таҙартыу буйынса бик күп эштәр алып барырға кәрәк.

Рәсәй кимәлендә "Һыу хужалығы комплексы стратегияһы" ҡабул ителгәйне. Әлеге ваҡытта беҙҙең республикала ошо стратегияға ярашлы "Һыу хужалығы комплексы программаһы" эшләнә. Был программала халыҡты сифатлы һыу менән тәьмин итеү мәсьәләһе үҙәк урынға ҡуйыла. Шулай уҡ был программа яҙ көндәрендә һыу баҫыуҙарҙан һаҡланыу сараларын камиллаштырыуҙы ла үҙ эсенә ала. Ул шулай уҡ "Дуҫлыҡ" монументы янында Ағиҙелдең ярын нығытыу сараһын да, һыу таҙартыу ҡоролмаларын яҡшыртыу, камиллаштырыу бурысын да үҙ эсенә ала. Сөнки хәҙерге ваҡытта, әйтәйек, сәғәтенә 50 кубометр һыу таҙартыуға ҡулайлаштырылған ҡоролма ике тапҡырға күберәк һыу таҙарта һәм был хәл таҙартылған һыуҙың сифатында сағылмай ҡалмай. Беҙ әлегә үҙебеҙ ҡулланған һыуҙы таҙартып өлгөрмәйбеҙ.

**Әхтәм Рауил улы, бөтә донъя сөсө һыу әйләнешендә боҙлоҡтар ҙур роль уйнай. Белеүебеҙсә, һыуҙың таҙа, эсергә яраҡлы өлөшө генә туңа, боҙлоҡтарға әүерелә, һуңынан ирей һәм беҙгә әйләнеп ҡайта. Ә бына климаттың йылыныуы эсергә яраҡлы һыуҙың кәмеүенә алып килмәйме?**

**Ә.Ғәббәсов:** Дөрөҫ, алып килә, шуға күрә хәҙерге ваҡытта боҙлоҡтоң тәбиғи иреүен көтөп тормайынса, уларҙы беҙгә яҡынайтып һөйрәтеп килтереп, иретеп ҡулланыу уйҙары ла бар ғалимдарҙың. Бынан тыш, донъяла һәм Рәсәйҙә диңгеҙҙәрҙең тоҙло һыуҙарын сөсө һыуға әйләндереү технологиялары һәм заводтар бар. Беҙҙә ундай завод Владивостокта эшләй. Японияла, мәҫәлән, ағастарҙан һәм үләндәрҙән ысыҡтарҙы йыйып, уларҙы эсәр һыу итеп ҡулланалар. Дөрөҫөн әйткәндә, алдағы йылдарҙа һыу ер йөҙөндә стратегик сеймалға әйләнәсәк. Хәҙерге ваҡытта шешәләргә тултырылған 1 литр һыуҙың хаҡы бензиндыҡына етеп бара. Элек беҙ ҡасандыр килеп һыуҙы һатып алырбыҙ, тип уйламай ҙа торғайныҡ.

**Әмир Миңнеәхмәт улы, тәбиғәтте һаҡлауҙы һеҙ шөғөлләнгән умартасылыҡ өлкәһе менән нисегерәк итеп бәйләргә мөмкин булыр ине?**

**Ә. Ишемғолов:** Ванга, кешелек умарталағы бал ҡорттары үлеп бөткәс, юҡҡа сығасаҡ, тип әйтеп ҡалдырған. Бында тәбиғәттең, кешенең, бал ҡортоноң тормошо бер бөтөндө тәшкил итеүен күҙалларға була. Ғилми яҡтан умартасылыҡты экология йәһәтенән ике юҫыҡта ҡарарға мөмкин. Беренсенән, беҙ бөгөн тәбиғәт зонаһында экологияның бал ҡорто тормошона нисек йоғонто яһауын өйрәнәбеҙ. Мәҫәлән, химия заводы булған Мәләүез районын алайыҡ. Унда барып, ерҙән, һыуҙан, һауанан, үләндән һәм башҡа сығанаҡтан анализға 40-50 проба алабыҙ ҙа, шулар нигеҙендә экологик һығымталар сығарабыҙ икән, ти. Ә бал ҡорто бер урт бал йыйған осраҡта ғына ла әллә күпме үләнгә, сәскәгә, ағасҡа барып, меңәрләгән проба ала. Ә ул сәскә һутының экологияға ниндәй мөнәсәбәте бар һуң, тигән һорау ҙа тыуыуы бар. Сөнки сәскә ерҙән дым менән бергә ерҙән экологик элементтарҙы ла үҙенә ала. Әйтәйек, шул уҡ үлән, сәскәне ашаған малдың һөтө, ите аша шул уҡ экологик элементтар кеше организмына килеп эләгә. Ә бал ҡорто миҫалында был күренеш нисегерәк сағыла һуң? Был осраҡта ғалимдар бал ҡорттарының үҙҙәрен һәм йыйған балын тикшерә. Һөҙөмтә иҫ киткес: бал тап-таҙа, әммә бал ҡорттары үҙҙәре экологик яҡтан бысраҡ. Әйтәйек, атом фажиғәһе булған Чернобылдең һауаһын, тупрағын, үләндәрен, сәскәләрен тикшереп, ундағы радиоактив матдәләрҙең, ауыр металдарҙың норманан әллә нисәмә тапҡырға артыҡ булыуын билдәләйҙәр, ә бына шул уҡ ерҙә йыйып алынған бал тап-таҙа. Быларҙан ниндәй һығымта килеп сыға? Бал ҡортоноң үҙен бәләкәй генә бер экологик завод тип атарға ла була. Әйтәйек, бал ҡорто нектарҙы ала, артабан үҙенең тәнендәге махсус ағзалары аша үҙләштерә, икенсе төрлө әйткәндә, фильтр аша үткәрә. Шул саҡта ул кешегә зарарлы булған ауыр металдарҙы, башҡа өлөшсәләрҙе үҙенең тәнендә ҡалдыра һәм балға тик таҙа өлөшөн генә сығара. Шуға күрә, йәйге эш сезонында үҙҙәренә ағыулы матдәләрҙе туплаған бал ҡорттарының ғүмере иң күбендә 45 көндән дә артмай. Бөгөн ғалимдар үлгән ҡорттарҙы йыйып, спиртҡа һалып, төнәтмә эшләйҙәр. Был - апитерапияның бер өлөшө. Был осраҡта бал ҡортона һеңеп ҡалған ауыр металдар спиртта тарҡала. Был металдар кеше организмына билдәле миҡдарҙа бик кәрәк. Тик уны күп эсергә ярамай, сөнки уның организмды ағыулауы бар. Был бәләкәй генә бал ҡорто өсөн үлемесле, ә кеше организмы өсөн кәрәкле доза. Был составты эскәндән һуң кешенең иммунитеты күтәрелә. Һуңғы тикшеренеүҙәр буйынса, ир-аттың простатит ауырыуына ла килешә был төнәтмә.

Икенсенән, тәбиғәтте һаҡлау буйынса ла бал ҡорто ҙур эш башҡара. Бал ҡорттары бер сәскәнән икенсеһенә күскән ваҡытта уларҙың һитәһен алып, икенсеһенә күсереп, һеркәләндерә, үҙебеҙсә әйткәндә, уларҙы аталандыра. Улар был юл менән төрлө үләндәрҙең, сәскәләрҙең һаҡланып ҡалыуына булышлыҡ итә. Шуға күрә, умартасылыҡтың тәбиғәтте һаҡлау буйынса уйнаған роле баһалап бөткөһөҙ. Был йүнәлештә беҙ үҙебеҙҙең учреждениела ғилми тикшеренеүҙәр алып барып, экологик яҡтан Башҡортостанды өс өлөшкә бүлдек. Тәүге өлөшкә завод-фабрикаларға яҡын критик зона инә, икенсе өлөш - урта зона һәм Башҡортостандың 22 районы ингән өсөнсө - таҙа зона. Ошо өсөнсө зона республикабыҙҙың йүкә ағасы үҫкән төбәгенә тура килде лә ҡуйҙы. Бөгөн беҙҙең республиканың тәбиғәт зонаһы 1 миллион 347 мең оя ҡорт тоторға мөмкинлек бирһә, шуларҙың 1 миллионын ғына ана шул 22 районда урынлаштырырға була. Алынған балдың 97 проценты ана шул зонаға тура килә. Бөгөн Башҡортостанда йылына 12 мең тонна бал етештерелһә, шуның 6 мең тоннаһы һатыуға китә. Ә Башҡортостан тәбиғәтенең бал биреү мөмкинлеге 535 мең тоннаны тәшкил итә. Шулай итеп, беҙ бөгөн тәбиғәттең бушлай биргән ошо продукцияһының ундан-ун икенән бер өлөшөн генә файҙаланабыҙ. Бөгөн Башҡортостанда 344 мең оя бал ҡорто бар, ә мөмкинлегебеҙ, әйткәнебеҙсә, 1 миллион 347 мең. Тимәк, беҙ бал ҡорто ояларының һанын арттырған һайын, яландарҙағы үләндәрҙе, сәскәләрҙе һеркәләндереп, тәбиғәтебеҙҙе лә һаҡлайбыҙ булып сыға.

**Ауыл хужалығының емерелеүе, колхоз-совхоздарҙың юҡҡа сығыуы, бер яҡтан ҡарағанда, ауылдарҙың социаль-көнкүреш хәлен түбән төшөрөп, кешеләрҙе эшһеҙ ҡалдырһа, икенсе яҡтан ҡарағанда, оҙайлы йылдар ерҙәрҙең һөрөлмәүе, химикаттар һибелмәүе һөҙөмтәһендә тәбиғәт үҙенән-үҙе һауыға ла бара түгелме?**

**Ә. Ишемғолов:** Социализм осоронда һәр ерҙең тупрағын тикшереп карта төҙөгәндәр. Ул картала теге йәки был урындағы тупраҡтың сифаты һәм ул ерҙәрҙә ниндәй сәсеү эштәре алып барырға мөмкин булыуы ла теркәлгән. Элек ауылдарҙа кәрәкмәгән, йәғни ундырышһыҙ ерҙәрҙе һөрҙөләр һәм иген сәстеләр. Унда иген, әлбиттә, уңманы, сыҡҡан ғыналарын мал тапап бөтөрҙө. Хәҙер беҙгә ғилми күҙлектән Башҡортостан ерҙәренә анализ яһап, өр-яңыса хужалыҡ итеү программаһын булдырыу зарур. Сөнки бар ерҙә лә иген сәсеп булмай. Ҡайһы ерҙәргә бесән генә сәсергә була, ә ҡайһы ерҙәрҙе тәбиғи үләндәр үҫһен өсөн сабынлыҡтар йә көтөүлектәр итеп ҡалдырырға мөмкин. Кем белә , бәлки, беҙ бөгөн ундырышлы ерҙәрҙе тапап та йөрөйбөҙҙөр, бәлки, ул ерҙәрҙе яңынан һөрөп иген сәсергә кәрәктер. Ә беҙ бөгөн дә кәрәкмәгән ундырышһыҙ ерҙәрҙе һөрәбеҙ һәм шунда иген сәсергә тырышабыҙ.

**Ә.Ғәббәсов:** Ғилми тикшеренеүҙәр кәрәк инде ул. Бына беҙҙең Ағиҙел йылғаһы элекке ваҡытта Стәрлетамаҡтың "Сода" кеүек берекмәләренең ҡулланылған һыуҙарҙы таҙартмай ташлауы арҡаһында ныҡ бысранғайны. Был бысраҡтар йылғаның үҙәнендә төпкә төшөп ятып ҡалды. Бөгөн йылғабыҙ предприятиеларҙың бысратыуынан түгел, шул ваҡытта тороп ҡалған ҡалдыҡтарҙан бысрана.

Бына һуңғы йылдарҙа ҡоролоҡ күҙәтелә. Был йылғаларҙағы һыу кимәленең 2-4 метрға түбән төшөүенә, эсәр һыуҙың әҙәйеүенә алып килде. Ғалимдар әйтеүе буйынса, 2015 йылда һыу кимәле тағы ла түбәнерәк буласаҡ. Тимәк, һыу әҙәйгән һайын, уның сифаты ла насарая барасаҡ. Сөнки предприятиеларҙан ташланған һыуҙарҙың нисбәте йылғалағы һыуға ҡарата үҙгәргән һайын, ҡатнашмала химик матдәләр ҙә күберәк табыласаҡ. Ер аҫтынан нефтен, газын һурып алғандан һуң, уның урынына тоҙло һыу ҡыуалар. Был һыу бер ҡайҙа ла китмәй, әммә бер нисә йыл үткәс, ер аҫты юлдары аша шишмәләрҙән, ҡоҙоҡтарҙан килеп сыға.

**Совет дәүерендә "Урман - тәбиғәттең тере ҡалҡаны" тигән лозунгтар яҙып ҡуйыла торғайны. Төптән уйлағанда, был, ысынлап та, шулай. Тәбиғәтте**



***Атом фажиғәһе булған Чернобылдең һауаһын, тупрағын, үләндәрен, сәскәләрен тикшереп, ундағы радиоактив матдәләрҙең, ауыр металдарҙың норманан әллә нисәмә тапҡырға артыҡ булыуын билдәләйҙәр, ә бына шул уҡ ерҙә йыйып алынған бал тап-таҙа. Быларҙан ниндәй һығымта килеп сыға? Бал ҡортоноң үҙен бәләкәй генә бер экологик завод тип атарға ла була. Әйтәйек, бал ҡорто нектарҙы ала, артабан үҙенең тәнендәге махсус ағзалары аша үҙләштерә, икенсе төрлө әйткәндә, фильтр аша үткәрә. Шул саҡта ул кешегә зарарлы булған ауыр металдарҙы, башҡа өлөшсәләрҙе үҙенең тәнендә ҡалдыра һәм балға тик таҙа өлөшөн генә сығара. Шуға күрә, йәйге эш сезонында үҙҙәренә ағыулы матдәләрҙе туплаған бал ҡорттарының ғүмере иң күбендә 45 көндән дә артмай.***

✓ ***Ни өсөн бөгөн нефтселәр юғары эш хаҡы алып эшләй һуң? Эш хаҡы ала алмайса йәшәгән ауыл кешеләренең ерҙәренә барып, ерҙең елек майын һурып, унның урынына тоҙло һыу тултырып, беҙ йәшәгән ерҙе бысратып киткән өсөнмө?***



**һаҡлауҙа урман ҙур роль уйнай. Тик хәҙерге ваҡытта урманда эштәр нисек тора һуң? Әйтергә кәрәк, бер ҙә маҡтанырлыҡ түгел. Урманлы яҡтарға барһаң, юл буйында ғына ағастар үҫеп ултыра, төпкә инһәң, урман ҡырып һалынған. Ҡыҫҡаһы, ул төбәктәр пеләш кешенең башын хәтерләтә. Хәҙер урман буйынса яңы федераль закон ҡабул ителде һәм урмандарыбыҙҙы аукцион аша ситтәр арендаға ала. Улар был урмандарҙа тик ҡырҡыу эше генә алып бара, ағас ултыртмай. Хәҙер урмандарҙа янғын сыға ҡалһа, ауыл халҡы, элеккесә, уны һүндереү өсөн дәррәү күтәрелеп тә сыҡмай, сөнки улар үҙҙәренеке булмаған урманды һаҡларға ла теләмәй. Бәлки, улар дөрөҫ тә эшләйҙер. Бына һеҙҙең урманды һаҡлауға мөнәсәбәтегеҙ нисек?**

**Ә.Ғәббәсов:** Мин үҙем урманлы яҡтан, Белорет районынан. ға алыу буйынса ойошторолған аукционда беҙҙең халыҡ, әлбиттә, ҡатнаша алмай. Унда олигархтар ғына ҡатнаша. Улар ағасты ла нисек ҡырҡа әле! Тотошлай урманды ҡырып һала. Ә бит урман улай итеп ҡырҡылмай, йәнәш үҫкән өс ағастың береһе генә ҡырҡыла ла, ҡалған икәүһе киләсәккә ҡалдырыла.

Кешенең күҙәнәктәре шул уҡ тәбиғәттә үҫеүсе үҫемлектәрҙекеменән бер иш. Әйтәйек, 1-се төркөмдәге ҡанлы кешегә башҡа төркөмдәр ярамай, бер кешегә һыуыҡ, икенсеһенә эҫе ярамай, бер кешегә был ризыҡ ярай, икенсе кешегә ярамай, сөнки уға аллергия була. Ә беҙ иһә, тәбиғәттәге барлыҡ тере йәндәргә лә бер үк төрлө ҡараштабулырға тырышабыҙ. Әммә беҙ бөгөн беҙҙең ысулдарыбыҙҙың, техник элементтарыбыҙҙың был ергә яраүы-ярамауы хаҡында уйланғаныбыҙ бармы икән? Быны тәбиғәт ҡабул итерме, әллә ҡабул те бөтөнләй юҡ. Быны беҙгә бер урында ла өйрәтмәнеләр. "Таҙалаған урында таҙа түгел, сүпләмәгән урында таҙа" тигән принциптан сығып ҡарағанда, беҙгә был мәҙәниәткә өйрәнеүҙе иң бәләкәй ғәмәлдән, ғаиләлә кешенең сабый сағынан башларға кәрәк. Мин был мәҙәниәткә өйрәнеүҙең башҡа юлдарын белмәйем. Ғаиләлә башланған был эш артабан мәктәптә, унан һуң уҡыу йортонда дауам итһә, сүпләнмәгән урындарҙа таҙа була инде.

**Ә. Ишемғолов:** Ни өсөн бөгөн нефтселәр юғары эш хаҡы алып эшләй һуң? Эш хаҡы ала алмайса эшләгән һәм йәшәгән ауыл кешеләренең ерҙәренә барып, ерҙең елек майын һурып, унның урынына тоҙло һыу тултырып, беҙ йәшәгән ерҙе бысратып киткән өсөнмө? Ә ниңә улар тапҡан нефтенән килгән табыштың 30-40 процентын ошо ерҙе яҡшыртыу, тәртипкә килтереү өсөн бирмәй һуң?

**Ә. Ишемғолов:** Был йола бал ҡорттарының йәшәү рәүешенә ауаздаш. Эшсе ҡорттар 45 көн йәшәй, тинек. Майҙан алып сентябргә тиклем генә бер ояла үлгән бал ҡорттарының дөйөм ауырлығы 40 килограмға тиклем барып етә. Хәҙер инде умарта янында өйөлөп ятҡан шундайын мәйеттәр тауын күҙ алдына килтерегеҙ. Әммә йәйге осорҙа умарта янында ундай тауҙы түгел, хатта бер генә үлгән бал ҡортон да күрмәҫһең. Бал ҡорттары үҙҙәренең күсен һаҡлар өсөн һуңғы көндәре еткәс, оянан ситкә китеп үлә. Был юл менән улар тоҡомдаштарын төрлө сирҙәрҙән һаҡлап ҡала. Тимәк, был йәһәттән бал ҡорттары үҙҙәренә исем биргән халыҡҡа бик оҡшаш. Шулай уҡ эттәр ҙә, бесәйҙәр ҙә, үлер мәле етһә, ҡырға, урмандарға китеп йән бирә. Хәҙерге ваҡытта иһә, бал ҡорттары, эттәр, бесәйҙәр һәм башҡа йәнлектәр һәм хайуандар экология йәһәтеаҙағына әҙер булһа, йыл башында беҙ старттағы спортсы һымаҡ баҫып торорға тейеш инек. Сөнки тәбиғәтте һаҡлау заводҡа барып, фильтр ҡуйыуға ғына ҡайтып ҡалмай бит. Был дөйөм экологияның бер элементы ғына.

**Ә.Ғәббәсов:** Эйе, хәҙер закон буйынса һәр бер эште тендер аша үткәреп кенә башҡарып була. Шуға күрә, ниндәйҙер сара өсөн финанс мәсьәләһе хәл ителгән хәлдә лә, ҡалғаны бик оҙаҡҡа һуҙыла торған. Ғәҙәттә, бындай осраҡта икенсе квартал үтһә, йыл үтеүгә иҫәпләнә.

# Һин - минә...

## һиңә

Элек беҙҙе, мәктәп уҡыусыларын, аҙна-ун көн буйына ағас ултыртырға, ултыртылған үҫентеләр төптәрен сүп үләндәренән таҙартырға алып йөрөй торғайнылар. 90-сы йылдарҙан был эш бөтөнләйгә туҡталып ҡалды тиерлек. Бөгөн урмандарыбыҙ компанияларға, шәхси хужалыҡтарға бүлеп бирелде, ҡыҫҡаһы, урманыбыҙ дөйөм халыҡ, йәмәғәтселек милке булыуҙан туҡтаны. Һыу буйынса белгес булараҡ, шуны ла әйтәм: һыуҙы һаҡлар өсөн иң беренсе нәүбәттә урманды һаҡларға кәрәк.

**Ә. Ишемғолов:** Мин был проблемаға төптәнерәк ҡарарға теләр инем. Мәҫәлән, урманлы Бөрйән кеүек райондарҙа ауыл араларындағы асфальт юлдар яңыраҡ ҡына һалынды. 90-сы йылдарҙа, шул уҡ Бөрйән районында, юлһыҙ ерҙән бара-бара ла, ҡапыл бер ауылға килеп сыға торғайныҡ. Ә бит был ерҙәрҙә борон-борондан атай-олатайҙарыбыҙ йәшәгән һәм ауылдар араһында оло юлдар булмауға ҡарамаҫтан, насар йәшәмәгән һәм был хәлде кәмселеккә һанамаған. Беҙҙең тарихи үткәнебеҙ, йәшәйешебеҙҙең һәр тармағы тәбиғәт менән бәйле булған.

Шуға күрә мин бөгөн урмандарыбыҙҙа күҙәтелгән ҡот осҡос күренештәрҙе бик ауыр кисерәм. Ни өсөн тигәндә, беҙ юлһыҙ замандарҙың михнәтен, ауырлығын кисергән саҡта ла, бының менән урманды, тәбиғәтте һаҡлауҙы маҡсат итеп ҡуйғанбыҙ. Тәбиғәтебеҙҙе һаҡлап ҡалғанбыҙ ҙа ул, тик кемдәр өсөн һаҡлағанбыҙ һуң? Мәҫәлән, беҙ Бөрйән ҡортон үрсетеү буйынса шул районға барғайныҡ. Шунда бәләкәй генә бер ауыл базаһында умартасылыҡ эшен ойоштороу хаҡында һөйләшергә уйлаһаҡ, баҡтиһәң, ул ауылды ҡайҙандыр ситтән килгән берәү 49 йылға ҡуртымға алған, имеш. Ҡуртымитмәҫме? Беҙ иһә, тәбиғәткә техникаға ҡараған һымаҡ ҡарайбыҙ. Был гайка, был болт бөтөн тракторға ла ярай, тигән принцип һаман да һаҡлана беҙҙә. Бөгөн Хәйбулла районының тәбиғәтен һаҡлау программаһы ул нисек Мәсетле районының программаһы менән тура килеүе мөмкин? Был турала бөгөн уйлаған, шөғөлләнгән кеше лә юҡ. Шуға күрә, бөгөн бал ҡортоноң тормошон өйрәнеп, уның философияһын аңлаған һымаҡ, тәбиғәттең дә тормошон өйрәнеп, уның философияһын аңлай белергә кәрәк. Мәҫәлән, бал ҡортоноң тормошон һәм философияһын нығыраҡ аңлаған һайын, ул күберәк продукция бирә.

Башҡортостандан Германияға делегация составында барырға тура килде. Унда ике көн йөрөгәндән һуң, барыбыҙҙың да һурпа эскебеҙ килде. Үкенескә күрә, немецтарҙа һурпа юҡ, уларҙың аштары ла бутҡа һымаҡ. Бәхеткә күрә, унда украиндарҙың милли кухняһы күргәҙмәһе бара икән. Шунда барып, борщ ашаныҡ һәм иркен тын алып ҡалдыҡ. Тап шуның кеүек, беҙ ниңә тәбиғәттең беҙҙән нимә теләүе хаҡында уйлап та бирмәйбеҙ. Был осраҡта тәбиғәттең йөрәк тибешен ишетә белергә кәрәк.

**Ә.Ғәббәсов:** Беҙҙә тәбиғәтте ҡулланыу, файҙаланыу мәҙәниә-

**▸ Күренекле ғалим, антрополог Ринат Йосопов "Ҡарға бутҡаһы" байрамының барлыҡҡа килеүе тарихын өйрәнеп яҙғайны. Унның аңлатыуынса, ислам дине килгәнгә тиклем башҡорттарҙа үлгән кешене шундуҡ ергә күммәгәндәр. Башҡорт халыҡ әкиәттәрендә лә быға шаһитбыҙ. Элек мәрхүмдең мәйетен ҡәберен ҡаҙмайынса ғына ер өҫтөнә һалып ҡуйып, өҫтөнә ҡоштар һыйырлыҡ ҡына 10-15 сантиметрҙай ярыҡ ҡалдырып, бура бурағандар һәм шунның эсенә һалып ҡуйғандар. Бындай буралар эшләү ҡайһы бер урындарҙа һаман да һаҡлана, тик унның нимәгә шулай эшләнгәне генә онотолған. Ҡыҫҡаһы, мәйеттәрҙе ошо рәүешле итеп ҡоштарҙан ашатҡандар, аҙаҡ һөйәген йыйып алып, шул урында бәләкәй соҡор ҡаҙып күмгәндәр. Донъя менән хушлашҡан саҡта кешенең иң яҡын туғанына әйткән "Һөйәгемә һин етерһең" тигән һүҙҙәре лә ошо йолаға бәйле. Ә "Ҡарға бутҡаһы"на килгәндә, яҙ көндәре ҡоштарҙы ҡанға әүрәтер өсөн ағастарға ҡыҙыл сепрәк бәйләп, бурама өҫтөнә бутҡа бешереп һалып саҡырып, шулай уҡ мәйеттең ҡалған өлөшөн ашатҡандар. Бында беҙ халҡыбыҙҙың элек-электән ерҙе үҙ әсәһендәй күреп ҡәҙерләүенә, тәбиғәт экологияһы менән рухи экологияның бер бөтөн булыуына шаһитбыҙ.**



нән кешеләргә ҡарағанда күпкә алдынараҡ, гуманлыраҡ. Ирекһеҙҙән, хәҙер кешенең аң үҫешен шик аҫтына алырға тура килә. Яңыраҡ бер ҡыҙыҡлы тәжрибә үткәргәндәр. Төрлө һүрәттәрҙе 30 секунд эсендә маймылдарға һәм кешеләргә күрһәтеп, аҙаҡтан тегеләрҙең һәм быларҙың иҫтә ҡалдырыу һәләтен тикшереп ҡарағандар. Баҡтиһәң, маймылдарҙың иҫтә ҡалдырыу һәләте кешеләргә ҡарағанда йөҙ тапҡырға яҡшыраҡ икән.

**▸ "Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылы"н һөҙөмтәлерәк итеп үткәреү өсөн һеҙҙең ниндәй тәкдимдәрегеҙ булыр?**

**Ә. Ишемғолов:** Минеңсә, беҙгә бында бер йыл ғына етмәй. Ни өсөн тигәндә, ҡасан программа әҙерләгәнсе, саралар проектын раҫлағансы, финанс тапҡансы ярты йыл үтеп тә китәсәк. Шуға күрә был йылды тағы ла оҙаҡҡараҡҡа һуҙырға кәрәктер. Әгәр ҙә былар барыһы ла 2012 йылдын

***Хәҙерге ваҡытта боҙлоҡтоң тәбиғи иреүен көтөп тормайынса, уларҙы беҙгә яҡынайтып һөйрәтеп килтереп, иретеп ҡулланыу уйҙары ла бар ғалимдарҙың. Бынан тыш, донъяла һәм Рәсәйҙә диңгеҙҙәрҙең тоҙло һыуҙарын сөсө һыуға әйләндереү технологиялары һәм заводтар бар. Беҙҙә ундай завод Владивостокта эшләй. Японияла, мәҫәлән, ағастарҙан һәм үләндәрҙән ысыҡтарҙы йыйып, уларҙы эсәр һыу итеп ҡулланалар. Дөрөҫөн әйткәндә, алдағы йылдарҙа һыу ер йөҙөндә стратегик сеймалға әйләнәсәк. Хәҙерге ваҡытта шешәләргә тултырылған 1 литр һыуҙың хаҡы бензиндыҡына етеп бара. Элек беҙ ҡасандыр килеп һыуҙы һатып алырбыҙ, тип уйламай ҙа торғайныҡ.***

**▸ Туризмды үҫтереү юлы менән дә тирә-яҡ мөхитте һаҡлап була бит...**

**Ә. Ишемғолов:** Бөгөн Башҡортостандың дөйөм майҙанының 6-7 проценты ғына айырым һаҡлана торған территория булып иҫәпләнә. Быға ҡурсаулыҡтар, башҡа тәбиғәт ҡомартҡылары урынлашҡан урындар инә. Ә ниңә беҙгә ярты Башҡортостан ерен айырым һаҡлана торған территория эсенә индереп, шул зонала туризмды үҫтермәҫкә? Ул ерҙәрҙе закон үҙе һаҡлар ине һәм бер кем дә ул ерҙәрҙе һатып йәки ҡуртымға ала алмаҫ ине. Быны эшләргә беҙгә бөгөн кем ҡамасаулай? Был осраҡта, беренсенән, был ерҙәрҙә экологик күрһәткес юғары булыр ине, икенсенән, еребеҙ һаҡланыр, өсөнсөнән, күпме эш урындары барлыҡҡа килер ине.

Тәбиғәтте һаҡлау тигән төшөнсә беҙҙең эшмәкәрлектең бер өлөшө генә булырға тейештер, тип уйлайым. Әлбиттә, тәбиғәтте һаҡларға кәрәк, әммә унның байлығын файҙалана белеү ҙә зарур. Мәҫәлән, Ирәмәл тауын ғына алайыҡ. Ирәмәл - матур тау, уны һаҡларға кәрәк. Бының өсөн унның тирә-яғына туристар өсөн ыҡсым ғына матур йорттар һалып, туристарҙы хеҙмәтләндереүселәр өсөн эш урындары булдырып, тауҙың матурлығын аҡыллы рәүештә файҙаланғанда, ул тағы ла һаҡлаулыраҡ һәм яҡлаулыраҡ булыр ине. Ошо уҡ программа буйынса Шүлгәнташта ла, Мораҙым мәмерйәһендә лә, башҡа урындарҙа ла эш алып барырға була. Әгәр ҙә беҙ был матур урындарыбыҙҙы һаҡлау ғына сараһын күрһәк, уны юғалтыуыбыҙ ҙа ихтимал. Һәр кемгә бөгөн үҙенең ғаиләһен тәьмин иткән эш урыны ҡәҙерле. Шунның кеүек, беҙ был байлыҡтарыбыҙҙы файҙаланыу, ҡулланыу аша һаҡлаһаҡ, унда эшләүселәрҙә икеләтә-өсләтә яуаплылыҡ тойғоһо барлыҡҡа килер ине, тием.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һүҙебеҙҙе тыуған еребеҙ, эскән һыуыбыҙ сафлығы өсөн ҡорбан булған Урал батырыбыҙҙы иҫкә алыуҙан башлағайныҡ. Әңгәмәлә шуны ла асыҡланыҡ: баҡтиһәң, бал ҡорттарыбыҙ ҙа Урал батырыбыҙ кеүек фиҙаҡәр йәндәр икән. Улар ҙа тәбиғәттәге зарарлы матдәләрҙе үҙенә һеңдереп, балға тик таҙа өлөшөн генә сығарып, Урал батыр кеүек ҡорбан була беләләр икән. Үҙ асылыңды һаҡлауҙың ошонан да яҡшыраҡ өлгөһө булыуы мөмкинме икән? Һеҙ нисек уйлайһығыҙ?**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

✓ *Әхмәт ағайҙың бөйөклөгө - уның кеше булараҡ та, рәссам булараҡ та ябайлығында. Ул аралашҡанда нисек ябай булһа, уның һүрәттәрендә лә ошо ябайлыҡ аша милли рух, милли һыҙаттар ярылып ята.*



*АРҘАҠЛЫ БАШҠОРТТАР*

# БЕҘҘЕҢ МИКЕЛАНДЖЕЛО



**Бөйөк башҡорт рәссамы, Салауат Юлаев исемендәге республика дәүләт премияһы лауреаты Әхмәт Фәткулла улы Лотфуллинға был көндәрҙә 85 йәш тулған булыр ине. Арҙаҡлы милләттәшебеҙҙе хәтергә алып, уның тураһында бер нисә кәлимә һүҙ:**

**Владимир РОМАНОВ, "Башинформ" журналисы:** Әхмәт Лотфуллиндың рәссам булараҡ бөйөклөгө шунда: ул киндерҙә үҙ халҡы вәкилдәренең дөйөм образын күләмле лә, шул уҡ ваҡытта ябай ҙа итеп бирә алған. Лотфуллиндың сағыу, ысынбарлыҡ өлгөһө булған ихлас ижады тәү сиратта милли үҙенсәлеге менән таң ҡалдыра. Ул милләте буйынса ғына түгел, ә тыуған еренә, үҙ халҡына тәрән бәйләнгәнлеге, уның көнкүрешенең, характерының, ғөрөф-ғәҙәттәренең үҙенә генә хас үҙенсәлеген күрә һәм тоя белеүе менән дә башҡорт булды...

**Әмир МӘЖИТОВ, профессор, Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы:** Әхмәт ағай Лотфуллинды мин һәр саҡ "Беҙҙең Микеланджело менән Рембрандт" тип атайым. Был юғары эпитеттар ғына түгел, ул, ысынлап та, шундай рәссамыбыҙ булды. Ул беҙҙә бик ҡаты тотто, талаптары ла юғары ине. Йәш сакта үҙ баһаңды, үҙеңдең нимәгә һәләтле икәнеңде бик үк аңлап та етмәйһең бит инде. Ә Әхмәт ағай беҙҙең ниндәй эштәргә һәләтле икәнде күрә белде: "Минең һүрәттәрем - үткән заман, бына һеҙ, егеттәр, милләтебеҙ һынлы сәнғәтенең киләсәген билдәләргә тейешһегеҙ", - тип әйтер ине ул Йәлил Сөләймәнов менән миңә. Әхмәт ағайҙы соцреализмда күпме тәнҡитләнеләр, әммә уның был йүнәлеш менән бер ниндәй ҙә уртаҡлығы булманы. Ул халҡыбыҙҙың рухын күрһәтә алды.

**Йәлил СӨЛӘЙМӘНОВ, Башҡортостан Рәссамдар союзы идараһы рәйесе урынбаҫары, Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы:** Әхмәт Фәткулла улы үҙенең оҫтаханаһын миңә мираҫ итеп ҡалдырҙы һәм беҙҙең шылтыратыу минең оҫонда эшләп йөрөгән ваҡытҡа тура килде. Был да осраҡлы түгелдер, моғайын. Мин оҫтаханаға килгән һайын уның рухын тоям, уның менән һөйләшеп, кәңәшләшеп алам, ул минең һәр эшемдең нисек тыуыуын күҙәтеп тора кеүек.

Әхмәт ағайҙың бөйөклөгө - уның кеше булараҡ та, рәссам булараҡ та ябайлығында. Ул аралашҡанда нисек ябай булһа, уның һүрәттәрендә лә ошо ябайлыҡ аша милли рух, милли һыҙаттар ярылып ята. Эштәрен ҡараһағыҙ, улар барыһы ла тәбиғи, бер ниндәй яһалмалыҡ, ниндәйҙер хәрәкәттәр, позалар юҡ. Ул, ғөмүмән, композицияға, типажға, образға етди иғтибар биреп, картиналарын йөкмәткеле итеп эшләнә. Башҡорт темаһына аҙһа ла, уның барлыҡ эштәре лә донъя кимәлендәге картиналар, донъя кимәлендә күтәрелгән темалар. Шул уҡ "Өс ҡатын" картинаһын ғына алып ҡарағанда ла, быуындар бәйләнеше, әсәлек бөйөклөгө хаҡында бөтөн нәмә әйтелгән. Хатта тәҙрә аша күренгән велосипедлы малай образы ла картинаны тулыландыра, уға тәрәнлек бирә.

Әхмәт Фәткулла улының картиналарына ентекләп күҙ һалғанда, ундай образдарҙы күп табырға мөмкин. Әгәр әҙәбиәттә ул Эзоп теле тип аталһа, Әхмәт ағайҙың һүрәттәрендә лә шундай үҙенсәлекле "тел" бар. Тәү ҡарашҡа, халыҡтың Беренсе майҙы байрам итеүен һүрәтләгән картинаһында бөтөнләй байрам түгел, ә халыҡтың берләшеүе, өмөт менән алға ҡарап, киләсәккә китеп барыуын аңларға мөмкин. Шул уҡ ваҡытта артҡы планда ике кәзә һөҙөшә. Бында ла бит тәрән мәғәнә һалынған. Шулай уҡ уның картиналарында сағыу төҫтәр юҡ. Быны ул үҙе башҡорт халҡының иппелеге, баҫалҡлығы менән аңлатты. Башҡорт бер ваҡытта ла юҡҡа сапсып бармаған, үҙенең баһаһын, бәсен белгән. Рәссамдың тағы бер үҙенсәлеге шунда - ул башҡорттарҙы милли кейем кейҙермәй төшөрҙө, ләкин һәр ҡараған кеше уның башҡорт икәнен таныны. Юҡһа, хәҙер теләһә ниндәй типажға милли кейем кейҙерәләр ҙә һүрәтләйҙәр. Кейем бар, үҙенсәлекле типаж юҡ. Ә был бик мөһим. Әхмәт Лотфуллин, ысынлап та, булмышы менән башҡортлоҡҡа, миллилеккә мөкиббән кеше ине һәм был уның картиналарында ла сағыла, тап шул миллилек аша ул үҙен тапты, данланы ла инде.

*ЗАУЫҠ*

# КИТАП УҠЫЙҺЫҢМЫ?

## Ә гәзит, журналдың ҡайһыһын?



**Мәғлүм булыуынса, совет осоронда Рәсәй иң уҡыған төбәк иҫәпләнде. Шуға ла совет халҡының интеллектуаль кимәле юғары баһаланды. Ни өсөн тигәндә, ул заманда китаптың күп уҡылыуы белемле булыуҙы билдәләүсе төп шарт булараҡ ҡабул ителде. Күптән түгел, Рәсәйҙең мәҙәни кимәле йылдан-йыл түбәнәйә, сөнки ул донъяла китап уҡыу буйынса иң һуңғы рәттәрҙең берен биләй, тигән мәғлүмәт күҙгә сағылды. Ысынлап та, кеше бөгөн бөтөнләй китап уҡымаймы? Һатып алып уҡыусы булмағас, магазиндар, китапханалар кем өсөн эшләй һуң? Ошо һорауҙар менән бер китап магазины директорына мөрәжәғәт иттем.**

- Рәсәйлеләр бөгөн китап уҡымай, тиеүҙәре, минеңсә, буш һүҙ генә, - тине директор. - Беҙҙең ҡалала, мәҫәлән, китапҡа ихтыяж кәмегәне юҡ. Һатып алырға теләүселәр элек нисек булһа, әле лә шул кимәлдә. Һорау булмаһа, китап индустрияһының да, магазиндарҙың да эшмәкәрлеге күптән туҡтаған булыр ине, тип уйлайым. Был тармаҡ иһә бөгөн дә үҫешеүен дауам итә. Айырма шунда: элекке һымаҡ китапҡа ҡытлыҡ юҡ хәҙер, йәнең теләгәнде һайлап алырға була. Магазин яңы китаптар менән даими тулыландырыла, сөнки һорау бар...

Магазинда алған мәғлүмәттәр шундай: ҡатын-ҡыҙҙар күберәк бәйләү, тегеү, бешереүгә ҡеүек көндәлек тормошта кәрәк булған шөғөлдәр тураһында уҡырға ярата. Һуңғы ваҡытта шулай уҡ психология буйынса китаптарҙы күп уҡый. Мөхәббәт тураһында романдар ҙа тиҙ генә һатылып бөтә. Ир-егеттәр иһә тарихи әҫәрҙәргә өҫтөнлөк бирә. Классик әҫәрҙәр уҡыусылар ҙа юҡ түгел.

Йәштәр бөтөнләй уҡымай тиеүҙәре лә төптө хата икән. Йәш быуын араһында ла китап уҡыусылар байтаҡ. Балалар өсөн аҙылғандары ла ҙур һорау менән файҙалана. Ә уҡыусы һораған китап магазин кәштәһендә булмаһа, заказ буйынса алып ҡайтала.

Шулай ҙа магазин директоры бергилке халыҡтың китап уҡыуға ынтылышы, ҡыҙыҡһыныуы кәмеүен инҡар итмәне. Быны ул телевидение, интернет, китаптарҙың электрон версиялары барлыҡҡа килеүе менән бәйләй. "Әммә халыҡ баҫма китап менән уның электрон төрөнөң айырмаһын - компьютерға текәлеп ултырыу менән китапты ҡулға тотоп уҡыу икеһе ике нәмә икәнлеген шунда уҡ төшөндө. Тиҙҙән уҡырға яратыусылар яңынан магазинға килә башланы",- тине директор.

Халыҡтың бер мәл китап уҡымай тороуының тағы бер сәбәбе бар, минеңсә. Ике быуат араһындағы йөмғиәттәге киҫкен үҙгәрештәр, мәнгелек ҡиммәттәрҙең үҙгәреүе, берҙәм идеологияның булмауы арҡаһында кеше нимә уҡырға белмәй баҙап ҡалғандыр, бәлки. Бөгөн иһә халыҡ яңы тормошҡа, яңы ҡоролошҡа яраҡлашты, өйрәнде. Һеҙәмтәлә күңелдәренә хуш килгән китаптары, яратҡан яҙыусылары, темалары барлыҡҡа килде. Иғтибар итһәгеҙ, совет заманындағы кеүек, бөгөн китап бүләк итеү, шәхси китапхана туплау яңынан модаға инә башланы. Юғиһә, бынан 13-17 йыл элек бүләккә китап бирһәң, урынһыҙ һымаҡ тойола ине, сөнки тап ошо осорҙа "аҡса бүләк итеү" йолаһы киң таралып китте.

Ҡала халҡының китап уҡыуын китапхана хеҙмәткәрҙәренән дә йөпләтергә булдым.

-Халыҡ китап уҡымай тип һис тә әйтеп булмай, - тинеләр унда ла. - Бына, мәҫәлән, беҙҙең китапхана менән йыл әйләнәһенә 2506 кеше файҙалана. Шуның яртыһы мәктәп уҡыусылары булһа, 667-һе - ҡаланың төрлө ойошмалары, учреждениеларында эшләүселәр, 95-е - эшһеҙ, 100-ҙән ашыуы - пенсионер, йәнә шул сама студенттар. Үткән йыл йөмғаҡтары буйынса китапханаға 25346 тапҡыр килгәндәр, уларға 64862 китап бирелгән. Китапханаға иң йыш йөрөүселәр, әлбиттә, хаҡлы ялдағылар.Бөгөнгө китап уҡыусы башлыса мажара, фантастика, детектив ярата. Ҡатын-ҡыҙҙар мелодрама уҡый. Башҡортса китап уҡыусылар ҙа кәмемәне. Бөтөнләй икенсе заман булһа ла, Зәйнәб Биишеваның трилогияһын яратып уҡыйҙар. Һуңғы йылдарҙа Таңсулпан Ғарипованың "Бөйрәкәй"е иң уҡымлы китаптарҙың береһе булды. Совет осоро менән бөгөнгөнө сағыштырғанда, айырма шунда ғына: элек китапханаға тотош класс менән килә торғайнылар. Хәҙер һәр уҡыусының тиерлек өйөндә компьютеры, интернеты бар. Шуға ла класс менән йөрөү ғәҙәте онотолдо...

Китапханасылар йәнә, бөгөн халыҡ гәзит-журнал уҡымай, тигән фекер менән дә килешмәй, сөнки ҡайһы берәүҙәр бында нәҡ ваҡытлы матбуғат уҡырға ғына килә. Айырыуса "Аргументы и факты", "Комсомольская правда" гәзиттәрен, "Шоңҡар", "Ағиҙел", "Ватандаш", "Вокруг света" кеүек аҙаби, фәнни-популяр журналдарҙы яратып уҡыйҙар. Әҙҙем уҡыусыларҙың исем-шәрифен хеҙмәткәрҙәр яттан белә. Бынан 15-20 йыл элекке менән сағыштырғанда, китапханаға гәзит-журнал уҡырға килеүселәр күбәйә, тигәндә, китапханасылар бының сәбәбен ваҡытлы матбуғатҡа яҙылыу хаҡтары артыуы менән дә аңлата. Хаҡтарҙың юғары булыуы гәзит-журналдар яҙҙырып уҡыуға, һис шикһеҙ, ҡамасаулай. Бер гәзит, журнал да алдырмаған ғаиләләр бөгөн бик күп.

Бөгөн телевидение, интернет китап уҡыу гәҙәтен тулыһынса ҡыҫырыҡлап сығарҙы, тигән фекер менән мин дә килешмәйем. Һәр кемдең йортонда үҙенең зауығына тура килгән баҫмаларҙы - нисек ябығырға, байырға, бәйләү-тегеү кеүек ҡул эштәренә өйрәткән китаптарҙы күрергә була. Психология, эзотерика буйынса, шулай уҡ дини әҙәбиәт тә бөгөн ҙур һорау менән файҙалана. Бөтә Рәсәй йөмәғәтселек фекерен өйрәнеү үҙәге тикшеренеүҙәре лә, илдә китап уҡымайҙар, тигән ҡараште бер ни тиклем инҡар итә: һорау алыуҙа ҡатнашыусы ике меңгә яҡын кешенең 58,7 процентының әҙәби китап уҡыуы асыҡланған. Тимәк, бөгөнгө тиҙ үҙгәреп торған заманда мәғлүмәттең һәм уны алыу сығанағының ни тиклем күп булыуына ҡарамай, китап уҡыусылар бөтмәгән әле, тигән фекергә урын бар.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

*ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*

# ИҠТИСАДИ ФЕКЕРЛӘҮ...

## матди хәлебеҙгә кәрәк

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



**Вилюр ӘХМӘТОВ, иктисад фәндәре кандидаты, БДУ-ның Сибай институты иҡтисад факультеты деканы:** Күптән түгел Башҡорт дәүләт аграр университетының Сибай филиалы ҡыҫҡа ваҡытлы йәш эшҡыуарҙар курсы ойоштороп ебәргәйне. Был курсҡа яҙылыу бушлай булғанлыҡтан, башҡорт йәштәре күпләп килер, иҡтисад нигеҙҙәре менән танышыр, тип көткәйнем. Ләкин көткәнем аҡланманы: лекцияларға башҡорт егет һәм ҡыҙҙары әҙерәк килде. Әлбиттә, йәштәрҙең барыһы ла битараф түгел, араларында уйлы, гөмле, маҡсатлылары ла осрай. Мәҙәниәт һәм сәнғәт өлкәһе тураһында әйтеп тороу ҙа кәрәкмәй: таланттарыбыҙ бик күп. Ләкин иҡтисад һәм техник фәндәр өлкәләрендә рәхәтләнеп өлгө итеп килтерерлек йәштәр юҡ кимәлендә.

Әлеге хәлдең сәбәптәрен әллә ҡайҙан төптән эҙләргә кәрәкмәй - улар өҫтә генә ята. Беренсенән, халҡыбыҙҙың "Бары менән байрам", "Алла бирһә" тигән ҡараш менән йәшәүе күңелдә ҡыра. Аллаға ышаныу яҡшы, тик Унан ғына көтөп ултырыу яҡшы түгел. Йәғни, ниәт итергә һәм сәбәп

ҺАБАҠТАР

**Интернеттың "Класташтар" сайтында статустар киң таралған. Улар - кешенең эске донъяһын, айырым бер мәлдәге тойғоларын, кисерештәрен сағылдырыусы фразалар йә уймаҡ хикәйәләр. Һәр кем статустарҙың күңеленә ятҡанын һайлап, үҙенең битенә ҡуя ла, әйҙә китә күмәкләп шуның буйынса фекер алышыуҙар. Минең был мәҡәләгә тотоноуыма ла шундай статустарҙың береһе сәбәп булды: "Артымда шыбырлашаһығыҙмы? Тимәк, мин алда! Тормошомдо тикшерәһегеҙме? Тимәк, минеке һеҙҙекенән ҡыҙыҡлыраҡ! Кәмселектәремде эҙләйһегеҙме? Тимәк, көнләшәһегеҙ!.." Кешеләр был статусҡа төрлө фекер белдергән. Берәүҙәргә кемдеңдер күҙен ҡыҙҙырып йәшәү оҡшай, икенселәрҙең, киреһенсә, көнсөлдәрҙән теңкәһе ҡороған... Нисек кенә булмаһын, көнсөллөк тойғоһо бөгөн дә өҫтөнлөк итә. Ул, әлбиттә, һәр заманда ла актуаль булған. Юғиһә, динебеҙ көнсөллөктө үлемесле гонаһтар иҫәбенә индермәҫ ине...**



# КӘМСЕЛЕКТӘРЕМДЕ ЭҘЛӘЙҺЕҢМЕ?

## Тимәк, көнләшәһең...

Үҙ ғүмерендә бер тапҡыр булһа ла көнсөллөк тойғоһо кисермәгән кеше юҡтыр. Көнсөл булмағандар ҙа бар, әммә улар ғәҙәттә был тойғоно бер тапҡыр кисереп ҡарап, уның үҙен ни тиклем бәхетһеҙ яһауын аңлап, был ғазаптан үҙ ирке менән ҡотолған кешеләр. Һәр хәлдә, минең үҙем менән шулай булды.

Мин йәш сағымда үҙемдең әхирәтемдән көнләшә торғайным. Артыҡ сибәр ҙә түгел, минең ише тәпәш йыуантаҡ булһа ла, ҡайҙа ғына барма, ул иғтибар үҙәгенә әйләнә, егеттәр уға тәү ҡараштан ғашиҡ була торғайны. Бейергә, йырларға оҫта булғаны өсөн генә лә түгел, ә тирә-йүнгә тик яҡты, шат тойғолар таратҡаны, кешенең эс-бауырына инеп һөйләшә белгәне өсөн... Күҙҙәренән нур сәсеп, көлөп ебәрһә, иҫ киткес матур кешегә әйләнә лә ҡуя. Үҙемдең уның күләгәһе булып йөрөүемә эстән шым ғына асыуым килә ине. Шулай ҙа көнсөллөк йәшереп булмай торған тойғо бит, ул йөҙөңдә лә, күҙҙәреңдә лә сағылып тора (юҡҡа ғына ҡытайса был һүҙ "ҡыҙыл күҙҙәр сире" тигәнде аңлатмайҙыр) һәм шуғалыр ҙа, беҙҙең аралар һыуынды. Әммә әхирәтем бер нәмә лә юғалтманы, ул, элеккесә, тирә-йүнгә шатлыҡ өләшеп йәшәүен белде, ауырлыҡтар күрһә лә зарланманы. Күп ваҡыт та үтмәне, мин дә, халыҡ мәҡәлендә әйтелгәнсә, "көнсөл көнө көйөнөс" икәнен, көнләшеп, үҙемдең тыныслығымды ғына юғалтыуымды аңланым. Күңелемдә был тойғо ярала башлаһа, шунда уҡ уйҙарымды икенсе, ыңғай йүнәлешкә борорға өйрәндем һәм былай йәшәүҙең иҫ киткес рәхәт икәнен тойҙом. Йәш сағымда үҙемде артыҡ аҡыллы булдым тип әйтә алмайым, әммә ошо бәләкәй генә аҡылды ваҡытында йөрәгемә һалған өсөн Хоҙайыма сикһеҙ рәхмәтлемен. Хәҙер мин психологтар тәҡдим иткән махсус һынамышты үтеп, "Һеҙ башҡаларҙың ҡаҙаныштарын тыныс ҡабул итәһегеҙ, хатта кеше уңыштарына ысын күңелдән ҡыуана беләһегеҙ" тигән яуап алдым. Тик шуныһы: минең көнсөл булмауым, киң күңеллелегем ҡайһы берәүҙәрҙә көнсөллөк тойғоһо уята...

Ә баяғы әхирәтемә килгәндә, уның артабанғы яҙмышына ла көнләшерлек: ул бөгөн бәхетле ҡатын, әсә, эшендә абруйлы хеҙмәткәр. Бөгөн мин "позитив фекерләү" тигән иҫ киткес күркәм фән менән танышып, Йыһандың "Ни сәсһәң - шуны урырһың" тигән законына көйләнгән был тормошта бәхет яулау өсөн үҙеңдең дә уға тик ыңғай энергия таратып йәшәргә тейешлегең тураһында уҡып белгәс, әхирәтемдең яҙмышы ни өсөн шулай уңышлы һалыныуын аңлайым. Мин уның өсөн сикһеҙ шатмын. Үҙемдең шәхси тормошомдоң да "Аллаға шөкөр!" тип әйтерлек ыңғай килеп сығыуын, булмышыма һалынған һәләттәрҙе тормошҡа ашырырлыҡ шарттарҙа йәшәй һәм эшләй алыуымды заманында холҡома үҙгәреш индергәнем өсөн Йыһан ебәргән рәхмәттер тип ҡабул итәм. Әйткәндәй, минең әлеге дуҫтарым араһында ла кешеләрҙең уңыштарына көнләшмәгән, эсендә үпкә йөрөтмәгән, үҙҙәренә таш менән атҡандарға ла тик аш менән атҡан ифрат киң күңелле ханымдар бар. Уларҙың да тормош баҫҡыстары буйлап еңел генә күтәрелеп барыуҙарын, юғары исемдәргә, вазифалы дәрәжәләргә өлгәшеүен мин донъяға тик позитив күҙлектән ҡарай белеүҙәре менән бәйләйем.

Шулай ҙа ерҙә көнсөллөк бар, һәм ул - бик ҡурҡыныс афәт. Нәҡ ошо афәт күпме гениаль идеяларҙы тормошҡа ашырыуға ҡамасаулай, ғашиҡтарҙы айырып, бәхетһеҙ итә, хатта кеше үлеменә сәбәп була. Ярлы - байҙан, сирле - һауҙан, һәләтһеҙ һәләтленән көнләшә. Үҙен башҡалар менән сағыштырған кеше өсөн сәбәбе табылып тора. Өҫтәүенә, бала саҡтан ата-әсәләребеҙ, туғандарыбыҙ беҙҙе башҡа тәртиплерәк, аҡыллыраҡ балалар менән сағыштырып, "ана ул шулай, ә һин былай" тип кәмһетеп, үҙҙәре лә һиҙмәйенсә, сабыйының күңеленә көнсөллөк орлоҡтары сәсә. Мәктәптә йә институтта отличниктарҙы һәм әүҙемдәрҙе өлгө итеп ҡуйып, уҡытыусылар башҡалар күңелендә шул уҡ йәмһеҙ тойғоно тыуҙыра. Ә инде хеҙмәт коллективтарында эштәге уңыштарың һәм етәксенең маҡтауы, башҡаларҙы һинә эйәрергә өндәүе коллегаларыңда ниндәй "тырнаҡлы" тойғолар тыуҙырыуы тураһында, минеңсә, һөйләп тороуҙың да кәреге юҡ. Бер уйлаһаң, былдай сағыштырыуҙар сәләмәт конкуренция уятып, тик файҙаға булырға, үҙ-үҙеңде камиллаштырыуға этәрергә тейеш кеүек. Әммә сәмле ярыштан айырмалы, көндәшлек кире һөҙөмтә бирә: кеше, яҙмышына үпкәләп, уңышлы коллегаһын күрә алмай үҙен үҙе ашай йә теге бәхетленең юлына кәртәләр ҡороу буйынса этлеккә күсә. Ә үҙенең тормошо эргәлә генә мәғәнәһеҙ үткәнен уйламай, ҡайҙалыр етәксе булып ултырырлыҡ сифаттарға эйә булһа ла, ябай хеҙмәткәр дәрәжәһенән ары үҫә алмай. Көсөндө көнсөллөккә әрәм иткәнсе, үҙ таланттарыңды асыуға йүнәлт тә бит. Уйлап ҡараһаң, һәр кемдә лә һоҡланырлыҡ һәм көнләшерлек нәмәләр етерлек бит инде, әммә көнсөл әҙәм үҙенең ҡиәфәтендәге, холҡондағы, йәшәү рәүешендәге өҫтөнлөктәрҙе күрмәй. Уға күршеләң тауығы ҡаҙҙай... Ошондай хәлгә тағы бер миҫал.

Минең бер әхирәтем белемлерәк, сибәрерәк һәм һәләтлерәк ҡайһы бер коллегаларынан үҙен кәм тойоп, уларға аҡ көнләшеү менән ҡарай ине. Ләкин хеҙмәттәштәренең уның бәләкәй генә уңыштарын да ауыр кисереүен, уның эшенә аҫтыртын тоҙаҡтар ҡороуын аңғарып: "Һуң улар күпкә өҫтөнөрәк тора лаһа, шуға ниңә мин меҫкендән көнләшәләр икән?" - тип аптырай торғайны. Ысынлап та, талантлы ғына кеше булһа ла, ул ҡырҡ биш йәшендә үҙен хәлһеҙ әбей кеүек тойоп, шәхси һәм эшлекле сифаттары буйынса күп комплекстарға эйә булып өлгөргәйне. Мин әхирәтемә Дейл Карнегиҙың "Тик үлгән этте генә туҡмамайҙар" тигән һүҙҙәрен миҫалға килтереп, тимәк, уның да кемдәрҙер өсөн буш урын булмауын, ә ҡарсыҡ көнөнә төшөргән хәлһеҙлеге нәҡ ошо көнсөл әхирәттәренән килгән хикмәт икәнен аңлатҡас (сөнки психологтар көнсөлдәрҙең бөтәһенең дә энергетик вампирҙар булыуын бер тауыштан раҫлай), ул оҙаҡ икеләнеп йөрөгәндән һуң эшенән китергә көс тапты һәм бөгөн яңы урында үҙен яңынан тыуған кеше кеүек хис итә: уйламағанда әҙәби ижадҡа тотоноп китте, сит тел өйрәнә башланы. "Ысынлап та, хәлһеҙлегем һыпырып ырғытҡандай булды. Үҙемде ҡанаттар үҫкән кеүек тоям. Башымда - мең төрлө ҡыҙыҡлы идеялар... " ти ул.

Психоанализ теорияһы буйынса, кеше ғүмер юлында көнсөл әҙәмдәр менән юҡҡа осрашмай. Улар - үҙҙәренә күрә тормош һабағы биреүсе уҡытыусылар. Беренсенән, шәхси өлгөләре менән көнләшеүҙең ни тиклем имәнес холоҡ булыуын күрһәтәләр, икенсенән, кешенең эшенә аяҡ салыуҙары менән сәменә тейеп, уны үҙбаһаһын күтәреүгә, үҙгәреүгә һәм камиллашыуға табан этәрәләр. Шуның өсөн уларға рәхмәтле лә була белергә кәрәк...

Психологтар йәнә, көнсөл әҙәмдәр бер ҡасан да үҙҙәренең ҡылыҡтарын көнсөллөккә һанамайҙар, ә ғәҙеллекте аяҡҡа баҫтырыу тип иҫәпләйҙәр, шуға уларҙы оялтырға, тәрбиәләргә тырышыу - мәғәнәһеҙлек, ә инде көрәшергә уйлаһаң, ул вампирҙарҙы энергияң менән туйындырып ҡыуандыраһың ғына, тиҙәр. Әммә мин бит үҙемдәге көнсөллөктө еңә алдым һәм балаларыма ла шундай тәрбиә бирҙем. Бәлки, миндә ул тойғо баш төрткән үлән хәлендә генә булып, уны йолҡоп ташлауы бер ни тормағандыр, ә инде ғүмере буйы көнләшкәндәрҙең күңелендә ул урман кеүек шаулайҙыр?.. Нисек булһа ла, кемгәлер көнләшер алдынан үҙ-үҙеңә: "Мин үҙемде бәхетһеҙ иткем киләме? Һаулығыма зыян килтергем киләме?" - тигән һорау биреү кәрәктер. Табиптар әйтеүенсә, яман шеш тә бит тән сире булыуҙан бигерәк йән сире һәм көнсөл, үпкәсел кешеләрҙә йышыраҡ осрай...

Ошо урында бер хикмәтле хикәйәт һөйләп киткем килә. Ҡасандыр борон бер бабай ейәненә йәшәү асылын аңлатҡан: "Һәр кешенең күңелендә ике бүре көрәшә: береһе уның изгелекте, мәхәббәтте, тоғролоҡто, ә икенсеһе көнсөллөктө, яуыҙлыҡты, алдашыуҙы аңлата", - тигән. Олатаһының әйткәндәренән тетрәнгән малай уйланып ултырған да:"Ә иң аҙаҡ ҡайһы бүре еңә һуң?" - тип һораған. "Ҡайһыһын ашатаһың, шуныһы һәр ваҡыт еңәсәк", - тигән аҡһаҡал.

Әгәр көнләшеп, күңелеңдәге икенсе бүрене туйҙырһаң, ул үҙе һине эстән ашаясаҡ, бәхетһеҙ итәсәк. Яҙмыш биргән бүләктәргә шөкөр итә белмәй, туҡтауһыҙ "минеке юҡ, минеке әҙерәк, минеке хөртөрәк" тигән уйҙар менән йәшәгән кешегә ысынлап та Йыһан "юҡ икән, булмаясаҡ та" тип яуап бирә. Тормошта кеше ниндәй генә уңыштарға өлгәшһә лә, унан матурыраҡ, йәшерәк, һәләтлерәк берәү табыласаҡ. Шуға, уңышлы кешенең төп ҡағиҙәһе шундай булырға тейеш: үҙ-үҙеңдән көнләш! Үҙеңде үҙең менән сағыштырыуҙы ғәҙәт итеп ал! Маҡсаттар ҡуй, уларҙы үтәргә ынтыл! Ә аҙаҡ сағыштыр: былтырғыға ҡарағанда быйыл һинең менән ниндәй яҡшы хәлдәр булды? Килеп сығамы? Ана шулай. Тик көнләшмә...

**Рәхимә МУСИНА.**
**Әбйәлил районы.**

---

ҡылырға кәрәк. Икенсенән, илебеҙҙең иҡтисад өлкәһендәге сәйәсәте йыш үҙгәреп тора, ул Рәсәй кешеһен тамам албырғатты, һағайтты. Совет осоронда ҡушылғанды үтәнек, ә хәҙер, ҡушыусы булмағас, ни эшләргә лә белмәйбеҙ. Өсөнсө сәбәп, минеңсә, дәүләт тарафынан йәш эшҡыуарҙарға ҡарата ярҙамдың һүлпән ойоштороloуы. Быға халыҡтың үҙенең һүлпәнлеген дә ҡушайыҡ. Иҡтисади фекерләү бик мөһим әйбер, ул кешенең матди байлығына булышлыҡ итеүсе төп шарттарҙың береһе икәнен аңлап етмәйбеҙ. Иҡтисади фекерләү ҡеүәһе үҫешһен, тиһәгеҙ, иҡтисад фәне буйынса белемегеҙҙе камиллаштырырға кәрәк буласаҡ.

Тормошта аңлы булыу кәрәк. Айырыуса иҡтисад донъяһында.

Әгәр үҙегеҙҙең шәхси эшегеҙҙе башлап ебәрергә ниәт итһәгеҙ, һис шикһеҙ, нимәнән башларға, тигән һорау килеп тыуасаҡ. Шулай итеп, ниҙән башларға һуң? Велосипед уйлап сығарырға кәрәкмәй: ауылда йәшәүселәр ит һәм һөттән ҡала, ҡорот, май, ҡыҙыл эремсек, талҡан етештерә ала. Һуңғы йылдарҙа бал етештереү арта башланы, шулай ҙа ул әле етерлек кимәлдә түгел. Ҡымыҙ бешеү ҙә киң таралмаған. Әйтәйек, беҙҙең көньяҡ-көнбайыш райондарында яҡшы һауыттарға ҡойолған сифатлы ҡымыҙ бөтөнләй юҡ. Иҡтисад талаптарына тап килтереп эшләһәң, ҡымыҙ бешеү эшенән дә яҡшы килем алырға була. Талҡан буйынса Мәрйәм Бураҡаеваның фирмаһы яҡшы эшләй, әммә барыбер ул ғына бөтә республиканы тәьмин итә алмай. Туризм өлкәһендә ҙур һорау менән ҡулланылған сувенир продукциялары етештереүҙе лә башларға була - теләгең генә кәрәк. Әле беҙ халыҡсан эшҡыуарлыҡ төрҙәрен генә һанап үттек. Күңелгә ятҡан башҡа төр бизнес асырға ла мөмкин.

Шулай итеп, кесе һәм урта эшҡыуарлыҡты үҫтереү талап ителә бөгөн. Юғиһә, ҡайһы бер сит илдәрҙә был тармаҡ эске тулайым продукцияның 90 процентын тәшкил итһә, Рәсәйҙә ул 20 процентҡа ла тулмай.

Был мәсьәләне хәл итер өсөн Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө фәнни үҙәгенең Мазһар Насип улы Иҫәнбаев етәкселегендәге бер төркөм ғалимдары Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш һәм төньяҡ-көнсығыш райондарының иҡтисади үҫеш программаһын төҙөгәйне. Ул тейешле емештәрен биргәне юҡ әлегә. Бөтәһе лә ҡайҙандыр бай инвесторҙың килеүен һәм эште ойоштороуын көтөп тик ултыра. Шуға күрә, муниципаль район хакимиәттәре, ауыл биләмәләре башлыҡтары кимәлендә халыҡҡа аңлатыу эштәре үткәрелһә, алға китеш булыр тип ышанабыҙ. Хеҙмәтте дөрөҫ һәм аныҡ ойошторғанда беҙҙең төбәкте иҡтисади яҡтан алға киткән бай төбәккә әйләндереп була.

ИНТЕРНЕТТАН



# НАСАР ХӘБӘРҘӘН...

## һимерәләр

■ Халыҡ-ара ғалимдар төркөмө лидерлыҡ сифаттары менән бәйле ДНК молекулаһын асыҡлаған. Йышыраҡ осраҡта, лидерлыҡҡа ынтылыу нәҫелдән күсә икән. Ғалимдар 4 мең кешенең эшенә, үҙен уратып алған кешеләргә мөнәсәбәтен генетик яҡтан тикшереп, лидерлыҡ һәләтен күрһәтеү тенденцияһы менән rs4950 генотибы бәйле булыуы билдәләнгән. Әммә ғалимдар үткәргән тәжрибәләр күрһәтеүенсә, генетика ыңғай тышҡы мохит тәьҫире менән берләшкәндә генә кеше уңышлы лидер булып китә ала. Тыумыштан кемгәләр лидер позицияһына сығыу һәм унда ныҡыныу мөмкинлеге бөтөнләй бирелмәһә лә, лидерлыҡ сифатының бер өлөшөн тәрбиәләп була, ти ғалимдар.

■ Майами университеты (АҠШ) хеҙмәткәрҙәре раҫлауынса, насар хәбәрҙәрҙән кешеләр артыҡ ауырлыҡ йыя башлай. Баҡтиһәң, негатив мәғлүмәт ишеткәндән һуң, кеше, үҙе лә һиҙмәҫтән, борсолоу тойғолары кисерә һәм юғары калориялы аҙыҡ ҡуллана башлай, сөнки стресс ҡорбаныа әүерелә. Былдайҙар насар яңылыҡтарға иҫе лә китмәүселәргә ҡарағанда көнөнә 40 процентҡа күберәк ашай икән. Тикшеренеүҙәр Америкала президент һайлауҙары тамамланған осорҙа үткәрелгән. Һайлау кампанияһы мәлендә иҡтисад насарайыуы, сәйәси хаталар тураһында күберәк һөйләнә. "Был мәғлүмәттәр кешеләрҙе күберәк калория ҡулланырға мәжбүр итә, сөнки уларҙа эволюцияның миллион йылдары эсендә барлыҡҡа килгән инстинкт уяна. Улар "мәлен файҙаланып, туйғансы ашап ҡал" тигән принципҡа эйәрә һәм калориялы аҙыҡты ауыр көндәр өсөн "запас"ҡа тиңләй. Шуға ла кем артыҡ ауырлығынан ҡотолорға теләй, сәләмәт йәшәү рәүеше алып барығыҙ һәм насар яңылыҡтар тыңламағыҙ", - тип кәңәш итә профессор Джулиано Ларан.

■ Ҡытай ғалимдары раҫлауынса, нәркәс, ала миләүшә, зәғферән, крокус һәм умырзаялар баш мейеһе эшмәкәрлегенә ыңғай тәьҫир яһай. Мәҫәлән, умырзая Альцгеймер ауырыуы ваҡытында мейе эшмәкәрлеген яҡшырта, тип яҙа "МедВести". Умырзая составындағы галантамин арҡаһында нейрондарҙан килгән мәғлүмәт әүҙемерәк тапшырыла, ул үҙ сиратында ауырыуҙың аҡыл функцияһына ыңғай йоғонто яһай. Нәркәстә лә был матдә бар, хәҙерге ваҡытта ғалимдар был ике үҫемлекте онкологик ауырыуҙарҙы дауалауҙа ҡулланыу мөмкинлеген тикшерә. Сидней университетының (Австралия) ғалимдары зәғферәндең күреү ағзаларының һығылмалы күҙәнәктәренә ыңғай тәьҫирен өйрәнгән. Крокустарҙа иһә колхицин тигән матдә бар. Ул яман шешкә һәм ялҡынһыныуға ҡаршы тороу сифатына эйә. Ала миләүшә тынысландыра, хәүеф тойғоһон юҡҡа сығара, йоҡоһоҙлоҡтан ҡотҡара.

■ АҠШ-та киҙеүҙән ярҙам итеүсе тундырма уйлап тапҡандар. Ул бал, имбир, әфлисун һәм лимон һутынан эшләнә. Икенсе вариантында бурбона һәм кайен боросо ҡушыла. Етештереүселәр раҫлауынса, был туңдырма инфекцияларҙан ярҙам итә, тамаҡ ауыртыуын бөтөрә. Туңдырмала шулай уҡ ауыртҡан тамаҡты тынысландырыусы пектин да бар.

МӨҒЖИЗӘЛӘР ДОНЪЯҺЫ

# АЛПАМЫШАЛАР ЭҘЕ...

## Бөрйәндә лә һаҡлана



### Һуңғы шаһиттар һөйләүенән

1942 йылдың йәйендә алпамыша Иҫке Монасип ауылынан Хәсәйенова Ғилмисара инәйгә осрай: "Ҡуян Ҡолтәүендә колхоз малын көтә инек. Минең менән бергә Исрафил менән Мөжәүер исемле ҡәйнештәрем дә бар, улар әле бәләкәй малайҙар ине. Бер саҡ 20 метр самаһы алыҫлыҡта ағас араһынан Ҡайынйорт йылғаһына төшөп барған бик ҙур, яланғас кешене күреп ҡалдым. Ул кешене һине нисек күрәм, шулай асыҡ күрҙем. Башын минең яҡҡа бороп ҡарап үтте. Күҙҙәре ҙур, ҡарашы ауыр. Елкә, беләк мускулдары бүртеп тора. Тиреһе кеше тиреһе төҫөндә, тик саҡ ҡына ҡуңырыраҡ. Ул йылғаға төшөп китте. Шул ыңғайы йөрәгем, башым ауырта, ҡоҫтора башланы. Атларлыҡ хәлем юҡ. Малайҙар шаярып килеп, Алпамышаны күрмәй ҡалды. Минең атларға хәлем ҡалманы. Ҡәйнештәрем һөйрәп тигәндәй алып ҡайтты. Һатыбалов Мөхәррәм бабай ферма мөдире ине. "Енгәбеҙ үлеп бара", - тип, малайҙар илай. Мөхәррәм бабай өшкөрөп, сүрәләр уҡып, Ҡөрьән менән туҡмап, кеше итеп ебәрҙе. Улым Хәйҙәр бер нисә айлыҡ ҡына ине, мин тамам һауыҡҡансы, уны имеҙергә ҡушманылар. Мөхәррәм бабай: "Иҫкәртергә онотҡанмын, Алпамыша кешегә элек-электән осрай. Кешенең йәнен һурып ала ул. Ярай, эргәндә малайҙар булған, һинә лә ҡағылыр ине", - ти. Күпме йылдар үтһә лә, иҫкә төшһә, йөрәгем ҡалтырай башлай..."

Балалар һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙың алпамыша ҡарашын күтәрә алмауын үрҙә Әхмәт ибн Фаҙлан да телгә ала.

- Алпамышалар борон беҙҙең яҡта күп йәшәгән, тип һөйләй тоғайны бабайҙар, - тип иҫләй Нәби ауылынан пенсионер Һатыбалов Бәхтийәр ағай. Ҡайынйорт йылғаһы буйында алпамыша ҡәбере лә бар. Элек бесәнгә барғанда бабайҙар туҡтап, ҡәбер янында аят уҡып китә торғайны.

Бәхтийәр ағай ҡәберҙе алып барып күрһәткәйне. Ҡәбер тигәнебеҙ өҫтөнә ағас үҫеп бөткән тәбиғи уба булып сыҡты. Уба тирәләй ябай алюмин сыбыҡ ярҙамында биополе эҙләп сыҡтым - бер нәмә лә юҡ. Ләкин убаға күтәрелгәс, ҡулымдағы сыбыҡ сама менән 3,5 метр аралыҡта урталағы ерҙән биоэнергия сығыуын күрһәтте. Кеше ҡалдыҡтары, нисә йыл ятыуына ҡарамаҫтан, биоэнергияһын юғалтмай. Тимәк, ҡәбер буш түгел.

Бер нисә йыл элек Брәтәк ауылы егеттәре балыҡҡа барғанда ҡомда бик ҙур кеше эҙҙәренә юлыға. Күп тә үтмәй, урманда алпамышаның ҡысҡырғаны яңғырап ишетелә. "Тауышы шул тиклем көслә, хатта мейегә үтеп инеп тора", - ти егеттәр.

2003 йылдың августа районың "Таң" гәзите биттәрендә "Ҡар кешеһе бармы беҙҙә?" исеме аҫтында шағирә Таңһылыу Баһауетдинованың ошо мәҡәләһе көн күргәйне:

"Район үҙәгендә йәшәүсе Әҡсән ағай Байморатов һөйләне. Ул ошо ваҡиғаның бер шаһиты.

2001 йылда булды был. Балалар менән Бастан тигән ерҙә бесән эшләп ята инек. Ул ер Йылайыр районы биләмәһе сигендә. Көн кискә ауышҡайны. Фәнис улыбыҙ бер йөк бесән тейәп, ауылға ҡайтып китте. Фәнүзә менән Миңзәлә бакуйҙарҙы йыйып йөрөй, кейәүҙәр күбәләп бара. Мин арттан күбәләрҙе рәтләп киләм. Шул ваҡыт урман эсендә ағасҡа доңғолдатҡансы һуҡтылар, хатта аяҡ аҫтындағы ер һелкенеп киткәндәй булды. Ҡыҙҙар, ҡурҡышып, йүгереп килде. Айыуҙыр ул, тигән булып, тынысландырҙым уларҙы.

Тимер будкала йоҡлап йөрөй инек. Төндә шунда килеп һуғып китте.

2003 йылдың йәйендә лә ул "дуҫ" үҙенең барлығын белдереп алды. Шул Бастан тигән яғындағы Һорлат тигән ергә бесәнгә барғайныҡ. Йоҡларға ҡалдыҡ. Салғыларҙы сүкештереп ҡуяйым, тип, иртәнге сәғәт алтынан тороп сыҡһам, йәнә урман эсендә ағасҡа килтереп һуҡтылар. Шунан икенсе яҡҡараҡ, тау яғына барып, кемдер яман итеп ҡысҡырҙы, - тип һөйләй Әҡсән ағай.

- Айыу булманы микән? - тип ҡыҙыҡһынам.

- Урманда йөрөгәс, беләм, был айыу тауышы ла, бүтән берәй беҙгә таныш булған януар тауышы ла түгел. Был ҡот осҡос көслә тауыш ине, ныҡ ҡалын тауыш. Хатта урман бер килке яңғырап торҙо. Будкала йоҡлап ятҡан кейәүҙәр ҙә ишеткән. Алтмыш алты йәшкә етеп, мин ундай тауыш ишеткәнем юҡ бүтәнсә. Айыу, болан тауыштарын да айыра алам, әммә был "дуҫтыҡы" һимаҡ тауыш бүтән юҡ..."

### Кем ул алты бармаҡлы ғифрит?

2003 йылдың август баштарында Иҫке Собханғол ауылы егеттәре Байморатов Фәнис һәм Хәкимов Ринат Бастанға бесән тейәп алып ҡайтырға баралар. Сабынлыҡҡа етәрәк, леспромхоз машиналары ағас ташып, ҡалын туҙанға әйләндергән юлда ғәжәп эҙҙәргә тап булалар. Егеттәр һөйләүе буйынса, туҙанға батыра баҫҡан ҙур эҙҙәр асыҡ күренеп ята. Эҙ, ябай кеше эҙенән бер ярым тирәһе ҙурыраҡ, аҙым араһы ла киң - ике метр самаһы. Шуныһы ҡыҙыҡ: аяҡ бармаҡтары биш түгел, ә алты. Бесәнгә йоҡларға барған егеттәр, ғифрит эҙен күргәндән һуң, кискә ҡайтыу яғына ыңғайлайҙар.

Кем ул алты бармаҡлы зат?

Ацтектар легендаһы буйынса, Мехико янындағы аллалар ҡалаһы Теотуаканды, ундағы Ҡояш пирамидаһын алты бармаҡлы гиганттар төҙөгән.

Боронғо йәһүдтәрҙең 2-се батшалар китабында, йәһүдтәргә ҡаршы фимистимиляндар яғында рефаим тоҡомонан алтышар бармаҡ биш алпамыша һуғыша. Бишеһе лә йәһүд һуғышсылары тарафынан үлтерелә.

Апокрифик йәки боронғо дини китаптарға инмәгән яҙмаларҙа рефаимдар аяҡ-ҡулдарында алтышар бармаҡ булғанлыҡтан, 12 берәмекле һандар системаһын төҙөүҙәре әйтелә. Фәрештәләрҙән алған ҡурҡыныс белем арҡылы, улар тәбиғәт өҫтөнән идара итәләр. Яңы ҡорал уйлап табып, бер- береһен ҡырып бөтөрәләр.

Эзотерик әҫәрҙәрҙә лә атланттарҙың алтышар бармаҡлы булыуы әйтелә.

Серле зат быйыл да үҙенең барлығын белдерә. Октябрь аҙаҡтарында Бөрйән полицияһы хеҙмәткәре Мөхәмәтйәнов Илгиз иптәше Толомғужин Илфат менән солоҡ юнырға Бастан яғына юлланалар. Эш барышында алпамышаның урман яңғыратып ҡысҡырған тауышы ишетелә. Ағасҡа һуғып, урман хужаһы тағы бер нисә тапҡыр ҡысҡыра. Мейегә үтеп торған, ҡот осҡос тауыштан ҡурҡҡан егеттәргә машиналарын ҡабыҙып, тиҙерәк ҡайтып китеүҙән башҡа сара ҡалмай.

- Серле яҡ ул Бастан тирәһе, - ти Илгиз. - Йәй бесәнде, ауыл йыраҡ булғас, ҡыуышта йоҡлап эшләнек. Ҡыын-тирәлә кеше әҫәре юҡ. Йоҡларға ятҡас, урманда ниндәйҙер сәйер музыка тауышы ишетелә. Уны ҡәйнеш тә ишетеп, мине телефондан музыка тыңлап ята, тип уйлаған.

**Заһир ДӘҮЛӘТБИРҘИН.**

**(Дауамы. Башы 5-се һанда).**

ШАҢДАУ

# ТРАЖ САҠҺА...

## үлтерә саға

**"Киске Өфө" гәзитенең былтырғы 48-се һанында философия фәндәре докторы Самат Мөхәмәтйәновтың яҙмаларында серле бөжәк "траж" тураһында уҡыным да, был турала үҙем белгәндәрем менән уртаҡлашырға булдым.**

Бесән мәле. Көн эҫе. Атайым менән әсәйем бесән күбәләй. Мин ҡайынлыҡта бөрләгән йыям. Ул ваҡытта миңә 11-12 йәштәр тирәһе ине. Бер аҙҙан атайымдар ялан уртаһындағы ҡайын күләгәһенә ял итергә ултырҙы. Яндарына мине лә саҡырҙылар. Айран эсеп, һыуһын ҡандырғас, атайым ҡайын күләгәһендә бер аҙ ятып алырға булды. Ләкин бер аҙҙан һикереп тороп, ситкә йүгерҙе, беҙгә лә ул тирәнән тиҙ генә китергә ҡушты. Баҡтиһәң, ҡайын ботағында көл төҫөндә ҙур оя эленеп тора һәм унда эре һәм ҡара төҫтәге бөжәктәр инеп-сығып йөрөй икән. Үҙҙәре һағыҙаҡҡа оҡшаһа ла, улар кеүек күп түгел, 6-7-нән артмай, үҙҙәре бик көслө геүләйҙәр. Оялары ла һағыҙаҡтыҡы кеүек түгел, инеп-сығып йөрөгән урындары 3-4 сантиметр, ә ояның бейеклеге 16-17 сантиметр тирәһе. Атайым был бөжәктең "драж" йәки "траж" тип йөрөтөлеүен һәм сағыуының кеше өсөн үлемесле икәнлеген әйтте. Әсәйем дә был һүҙҙәрҙе дәлилләне. Шулкаса беҙ ул ҡайын төбөнә барманыҡ.

Самат Мөхәмәтйәнов, "траж" һүҙенең аңлатмаһын 1993 йылда сыҡҡан башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлегенән эҙләп таба алманым, тип яҙа. Ләкин шул һүҙлектең II томында былай тип аңлатма биргәндәр (433-сө бит): тыраж, драж - ҡараһыу йәки һарғылт төҫтәге яры ҡанатлы, бик эре, һағыҙаҡ һымаҡ саға торған бөжәк. Ҡара тыраж, һары тыраж. Тыраж һағыҙаҡ кеүек ҙур, һары... һирәк саға. Саҡһа, үлтерә саға. Я.Хамматов.

**Флүрә ШӘРӘФЕТДИНОВА.**
**Миәкә районы Биҡкол ауылы.**

*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# ХӘРЕФ-ӨНДӘР АТАМАҺЫ ҺӘМ...



## һандар хикмәте

2012 йылдың тотош һан ҡушылмаһы 5 һанын бирә (2+0+1+2=5). Был башҡорт телендәге иң арҙаҡлы, һөйкөмлө хәрефтең - "һ"ның һаны. "Һи" - "тәҙрә" тигәнде аңлата. Ишектән айырмалы рәүештә, тәҙрә өйгә тик яҡтылыҡ менән һауаға ғына инергә мөмкинлек бирә. Ул йортта эске донъяны тышҡы донъя менән бәйләй торған урын, йәғни - "күҙ", "ҡараш", "күреү". Күҙ ҙә бит кешенең эске донъяһын тышҡы донъя менән бәйләй, кеше-ара мөнәсәбәттәргә контроллек итә, күңел яҡтылығын тыуҙыра. Эзотерик яҡтан һ өн-хәрефе кешеләрҙе бер-береһе һәм Илаһи башланғыс - Аллаһы Тәғәлә менән бәйләүсе "дин"де белдерә (бәхет ҡошо Һомай исеме лә ошо мәғәнәне үҙ эсенә алған: һ+ом(аум)+ай).

Һан булараҡ, ул кешеләге биш ағза тойғолары: еҫ һиҙеү, тойоу, тәмләү, күреү, ишетеү менән бәйле. Халыҡтағы "Билде биштән быуып" тигән әйтем дә (бер мәғәнәһендә) ошо сифат-тойғоларҙы ихтыяр көсө менән туплап, Аллаһы Тәғәләгә тапшырып эш башлауҙы белдерәлер (биште бергә төйнәгән йоҙроҡто ла онотмайыҡ, ҡайһы саҡта ул да кәрәк).

Ә "һ" өнө менән "б" өнөнөң мәғәнәүи атамаһының ҡушылмаһы кеше тормошонда иң мөһим, иң ҙур урын алып торған хис-тойғonoң исемен бирә: һ+өй. Кеше ошо тойғоно кисермәһә, йәшәүҙең мәғәнәһенә лә төшөнә алмаясаҡ. Сөнки тормоштоң, йәшәүҙең төп һынауы һөйөү менән бәйле: һ+өй, һ+өйөү.

Йәһүд телендә һандың исеме "хомеш" - "ҡоралланған" тигәнде аңлата. Астрологик яҡтан Ҡуҙы менән бәйле. Ҡуҙы исемендә лә хикмәткә ишара ята. Ҡуҙ - усаҡтың тере күмере, ул ғаилә усағын яндырып ебәрергә, һүнһә, тоҡандырырға мөмкинлек биргән тере ҡуҙ-күмер. Ерҙәге йәшәреү, яңырыу осорон да ул яндырып, ҡуҙғытып ебәрә. Ҡатын-ҡыҙҙың оҫталығы, аҡылы ла ғаилә усағының тере ҡуҙын көл аҫтында һаҡлай белеүҙә.

Былтыр барыһы ла хәүефләнеберәк көткән 21 һанына килгәндә, һандың дөйөм ҡушылмаһы шулай уҡ өс һанын тыуҙыра: 20+1=2+1=3. Егерме һаны 2-не 10-ға ҡабатлағандан килеп сыҡҡан: 2x10. Был ҡабатланышҡа хәрефтәрҙе ҡуйһаң, "би" килеп сыға, йәғни күктәге өй менән ерҙәге өй ҙә бер ҡанун буйынса йәшәй. Би "иб" һүҙенең кире әйтелеше. Ә "би" һүҙе башҡорт халҡындағы йола менән туранан-тура бәйле - би+бисә һәм бай+бисә. Борон туй ваҡытында ир менән ҡатындың ғаиләлә лә, өйҙә лә тотасаҡ урынын билдәләү, юрау өсөн батырҙар көрәше уҙғарылған. Еңгән батырға - һебә, күкрәк өлөшөнөң һул яҡ, йөрәк яғы ҡабырға һөйәге; еңелгән батырға муйын һөйәге бирелгән. Әгәр ҡыҙ яғы батыры еңһә, ҡыҙ би бисә була һәм егет ҡатын өҫтөнән башҡа кәләш алыу хоҡуғын юғалта. Ә инде егет батыры еңһә, ҡыҙ бай бисә - муйын ғына булып ҡала. Егет тағы бер нисә ҡатын ала ала. Был турала Мөхәмәтша Буранғолов яҙып ҡалдыра. Ошо йоланан сығып ҡараһаҡ, 20 һаны "би" булып сыға түгелме? Ә алефтың - "а"-ның алғы планға сығыуы ҡатындан әүҙемлек, илһамлы көс талап итә. Был "а" инде өй эсендәге әүҙемлекте түгел, йәмғиәт тормошондағы, социумдағы әүҙемлекте лә күҙ алдында тота. Был әүлиә олатайым, халыҡта әйтеп йөрөтөлгәнсә, Мостаҡ мулланың (Мифтахетдин) әйткән көнөнөң етеүен билдәләгән ваҡыттыр, моғайын. Ул 1920 йылдарҙа уҡ әйткән: "Хәҙер яулыҡлылар заманы етә, яулыҡлылар хаким итәсәк, яулыҡлылар хөкөм йөрөтәсәк".

**Гөлфирә ҠОТЛОМӨХӘМӘТОВА.**

**(Дауамы. Башы 3-5-се һандарҙа).**

*ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ*



# УН АЛТЫ ЙӘШЛЕК ҠАРТЛАС

## Үҙемде аңлау башы

Йәш сағымда наҙан инем. Ата-әсәләр тәрбиәләй, мәктәп белем бирә, поликлиникалар һәм дауаханалар кешене дауалай, тип уйлай торғайным. Үҙемдә минеке булған бер нәмә лә юҡ - мин тулыһынса тышҡы мөхиттең көйһөҙлөгөнә һәм афәтле көстәрҙең йоғонтоһона бәйле. Әгәр дуҫтарым өҫтәл артына ултырып эсә башлаһа - мин дә уларға ҡушылдым. Һуғышырға барһалар - ҡоралланып алып, мин дә эйәрҙем. Вагон бушатырға икән - мин дә ҡалманым. Ниндәйҙер әбейгә йортон ремонтларға ярҙам итһәләр, шаулы төркөм араһында мин дә булдым. Бер һүҙ менән әйткәндә, үҙемдең ихтыярым, үҙемдең тормошом, үҙемдең яҙмышым булманы. Һуҡыр килеш йәшәгән һәм үҙен кеше тормошоноң һәр миҙгеленең ҡәҙерен белергә өйрәтә алмаған организмдың бер өлөшө генә инем.

Балаларым медицина университетында уҡый башлағас, донъяның микробтар, бактериялар, вирустар менән тулы икәнлеген белдем. Һәр кеше ауырыуҙарҙы йөрөтөүселәр өсөн һауыт булып тора. Беҙҙең теләһә ҡайһы ваҡытта етди ауырыу, мәҫәлән, туберкулез, менән сирләүебеҙ ихтимал. Был хәүефле сирҙе йөрөтөүсе теләһә ниндәй индивидтың туҡымаларында йоҡомһорай, тип аңлатты миңә балаларым. Иммун системаһы көсһөҙләнһә, туберкулез таяҡсалары кисекмәҫтән төп бурысын башҡара башлай - үрсей. Беҙ таяҡсаларға үпкәләй алмайбыҙ: улар Алла тарафынан яратылған икән, йәшәүгә хоҡуҡтары бар. Һәм беҙҙең ошо йән эйәләре йәшәү өсөн тәғәйенләнгән организм түгеллегендәге инаныуҙарыбыҙ тәнҡиткә дусар булырға тейеш. Туберкулез таяҡсалары, әгәр үҙ телдәрендә шундай термин булһа, сәләмәт кеше - насар кеше икәнлегенә инаныр ине, сөнки унда уларға йәшәү һәм үрсеү өсөн мөмкинлек юҡ.

Табиптарға йөрөмәҫкә лә мөмкин: иммун системаһының торошон асыҡлау өсөн үҙегеҙҙең ирендәрегеҙгә иғтибар итегеҙ. Әгәр улар даими герпес менән ҡаплана икән, иммун системағыҙҙың ныҡ көсһөҙләнеүенә инана алаһығыҙ. Ул һеҙ ит ашаған өсөн көсһөҙләнә. Ғәҙәти кеше йәш ваҡытында уҡ иттән баш тартһа, яман шеш ауырыуы уны урап үтәсәк. Ҡайһы берҙә, шундай-шундай кеше тәмәке лә тартманы, эсмәне лә, иртән йүгерҙе, барыбер күптән түгел генә үлеп ҡалды, тигән һүҙҙәр ишетергә тура килә. Һәм был хәбәрҙе еткереүсенең тауышында вафат булыусының үлеме менән ҡәнәғәтлек тойғоһо кисереүен тойомларға мөмкин. Үсләшеүсенең төпкө аңы: "Бына мин тәмәке лә тартам, эсәм дә, бигүк намыҫлы һәм әхлаҡи булмаған тормош алып барам, шуға ҡарамаҫтан, теремен. Ә ул оҙаҡ йәшәргә тырышһа ла, үлеп китте", - тигән кеүек. Ғәҙәти ябай кеше бер нәмәне аңламай: сәләмәт тормош алып барыусылар ерҙәге көндәрен оҙайтырға теләмәй. Улар бары сәләмәт булып үлергә теләй. Ә был нимәне аңлата? Бары шуны: улар кисен йоҡларға яталар һәм иртән уянмайҙар. Ундайҙар табиптың, экстрасенстың йәки икенсе берәй дауалаусының күҙенә ҡарап, бер нисә ай ғүмер һорауҙы үҙ абруйынан түбән тип һанай. Эйе, ҡайһы берҙә рухтары ныҡ, көслө ирҙәр, матур ҡатындар, ҡәтғи, аскет тормошо алып барыуына ҡарамаҫтан, йәш кенә килеш был донъянан китә. Әммә уларҙың иртә китеүенең сәбәбен күҙгә күренгән тормоштан ситтә эҙләргә кәрәктер: бәлки, улар үҙҙәренең был планетала "уҡыуын" тамамлап, йәшәйештең икенсе өлкәләренә киткәндер.

Минең иммун системам шундай көсһөҙ ине. Унының шулай булыуы хаҡында даими сыҡҡан ирен осоноуҙарҙан да, тәнемдәге яраларҙың оҙаҡ уңалыуынан да белдем. Саҡ ҡына шырау ҡаҙалһа ла, урыны эренләнә. Осраҡлы ғына ҡырҡылған урын оҙаҡ һәм интектереп уңалды. Һуҡыр эсәккә операцияның эҙемтәләре лә эренләү менән тамамланды. Яра оҙаҡ уңалды, унын урынында билдәле яра эҙе ҡалды. Операциянан һуң үҙемдең хәлемде әле лә иҫләйем: көслө ауыртыу һәм һыуһау. Ауыртыуҙы баҫыусы уколдарҙы бик һирәк эшләгән кеүек тойола һәм ошо процедура ваҡытын көтөп ала алмай инем. Шәфҡәт туташтарынан иламһырап, ҡасан укол ваҡыты етеүен һорарға ла оялманым. Бөгөн иһә был хаҡта һөйләргә лә оят, әммә шулай булды - һәм мин был хаҡта өндәшмәй ҡала алмайым.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ,**

**философия фәндәре докторы.**

**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Уңыштың һәм камиллыҡтың 200 төп сере

54. Эшҡыуарлыҡ күҙлегенән ҡарағанда уңайлы булған ҡара төҫтәге костюмдар (ҡара зәңгәр, ҡара күк, диңгеҙ төҫө, ҡара-һоро) власты, тәрән фекерҙе һәм абруйҙы символлаштыра. Һеҙ берәй ваҡыт бронза төҫөндәге костюм кейгән премьер-министрҙы күргәнегеҙ бармы?

55. Даими рәүештә эшҡыуарлыҡ буйынса партнерҙарығыҙға һәм клиенттарығыҙға ҡағыҙға яҙылған хәбәрҙәр ебәрегеҙ - был бәйләнеште нығытырға һәм мөнәсәбәттәрҙе тотоп торорға ярҙам итә. Дүрт айға бер тапҡыр булһа ла ниндәйҙер ҡиммәтле нәмәне почта аша ебәреүҙе иҫегеҙгә төшөрөп торған система эшләгеҙ. Йыл иткән ерегеҙҙән бер-ике открытка булһа ла ебәрегеҙ. Бер нисә йөҙ открытка һатып алырға аҡсағыҙҙы һәм уларҙы тултырып ултырырға бер нисә сәғәт ваҡытығыҙҙы йәлләмәгеҙ. Был ваҡытты һәм аҡсаны ғәҙәти булмаған файҙалы эшкә һалыуҙың бер ысулы. Ҡайһылыр партнерығыҙға ниндәйҙер гәзит мәҡәләһен һалып, һеҙҙеңсә, был мәҡәлә уны ҡыҙыҡһындырыуы мөмкин булыуын йәки һеҙ һаман да элеккесә дуҫлығығыҙҙы баһалауығыҙ тураһында яҙып ебәрә алаһығыҙ. Компания идарасыһы, студент, магазинда һатыусы йәки ата-әсә булһағыҙ ҙа, һәр ваҡыт кешеләр менән яҡшы мөнәсәбәттәр һаҡларға тырышырға тейешһегеҙ.

56. Бәхетле, шат тормоштоң ике нигеҙе тип тигеҙлекте һәм уртасалыҡты атайҙар. Үҙеңдең барлыҡ эшмәкәрлек төрҙәре араһында баланс тоторға кәрәк, бер сиктән икенсеһенә ташланырға ярамай.

57. Йәсмин сәйе эсегеҙ. Ул дөйөм сәләмәтлекте нығытыу күҙлегенән ҡарағанда ла, көсөргәнештән арындырыусы булараҡ та һәйбәт. Шулай уҡ ҡайнар һыулы стаканға бер нисә киҫәк имбир һалып ҡарағыҙ. Бындай сәй йәшәү көсөн тергеҙә һәм һеҙҙе бик шәп физик формала тотасаҡ.

58. Ваҡытығыҙҙы дөрөҫ бүлеү һеҙҙе һығылмалы итер. Ул һеҙгә мөмкин булғандан күберәкте эшләргә һәм уны ҡыҫҡа ваҡытта атҡарып сығырға ярҙам итер.

59. Шәхси үҫеш тураһындағы китаптарҙы иман урынына ҡабул итмәгеҙ. Уларҙы уҡығыҙ һәм бары тик үҙегеҙгә файҙалы идеяларҙы ғына алығыҙ. Ҡайһы берәүҙәр барлыҡ күрһәтмәләрҙе лә теүәл үтәргә тырышып, бер сиктән икенсеһенә ташланалар. Һәр китап ниндәйҙер бер генә бик файҙалы стратегияны алға һөрә. Һеҙгә нимә кәрәк - шуны ғына алығыҙ, ҡалғандарын, бер ниндәй үкенеүһеҙ, ситкә ташлағыҙ.

